*Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Ата-әсәгеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаç. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә сараларҙы алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ, серҙәрегеҙҙең хазиналары һәр ваҡыт уларҙың күңелендә булһын!*

***РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

12 -18 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№37 (351)

www.kiskeufa.ru



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көҙгө йәрминкәлә...**

муллыҡ йөрөй аяҡланып




4

**Әйҙә, кәләш димләйек!**

Өфөлә мосолмандар өсөн таныштырыу үҙәге асылды



6

**Сардар фарман бирмәйәсәк,**

йәки Башҡорт менталитеты тураһында...





8-9

**Ташҡабаҡта...**

сер йәшенгән



12

**ТВ программа**

14


*ИҒТИБАР!*

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ БАРЛЫҒЫБЫҘҘЫ...

## матбуғат баçмаһына яҙылып та белдереп була

**Тағы ла һынау мәле етте: гәзитебеҙҙәге һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уҡыусылар күңеленә ятамы, улар туған телдәге баçманы ниндәй дәрәжәлә баһалай икәнен һынау мәле. Ғөмүмән, туған телдәге матбуғат баçмаһына яҙылыу милләттәштәрҙең рухи ныҡлығын да һынар, уларҙың интеллектуаль кимәлен дә билдәләр бер сара ул.**

### Шулай итеп...

2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итәбеҙ. Башҡорт телендә сыҡҡан баçмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө икәнен дә белдермәксебеҙ: **50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**

Әлбиттә, тоғро дуçтарыбыҙ хаҡына ҡарамайынса ла гәзитебеҙгә яҙыласаҡ икәненә иманыбыҙ камил. Арзан булған өсөн генә яҙылғандар ҙа отолмаç, ҡулдарына матур йөкмәткеле гәзит алып ҡыуаныр. Баçманың йөкмәткеһе барыбер үҙ уҡыусыларын ишәйтәсәк, тигәнгә инанып йәшәлә. Шуға ла беҙ үҙебеҙҙең гәзит тураһындағы өгөт "ҡармағыбыҙҙы" машина, ат, һыйыр кеүек ҡиммәтле бүләктәр менән "емләмәйбеҙ", ә иң тәүге сиратта һеҙҙе йөкмәтке менән ылыҡтырабыҙ. Ә шулай ҙа... Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында **төçлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеçә телефоны** ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға **дини календарь** алып та шатланыр.

### Һәм тағы...

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһын да дауам итмәксебеҙ.** Бөгөн милли матбуғат баçмаларының иң күп уҡыусылары - ауыл кешеләре. Айҙанайға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеген, рухи аҙыҡтан айырылмау юлын табалар. Ҡала кешеләре кеүек, анды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты. Шуға ла, әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе **ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуçтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә** "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баçманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ, һәм рәхмәт уҡыр. Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ!

### Тағы бер тәҡдим бар...

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙе шатландыра, кәйефте күтәрә, бәхет нурына ҡойондора торған бәләкәй генә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға, эҙләргә кәрәк, тибеҙ һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Бергә йәшәйек, бергә эҙләйек бәхетле итә торған сараларҙы.

### Өфөләләргә...

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә матбуғат киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.

- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзанyраҡ: ярты йылға - **225 һум**.

- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баçмабыҙ бер йылға **373 һум 20 тингә** генә төшәсәк.

### Әйткәндәй...

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ" тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баçмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, ғәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Баймаҡ районы Ярат ауылы ағинәйҙәре һәм аҡһаҡалдары.

*✓ Дөрөҫөн әйткәндә, ҡала мәктәптәрендәге башҡорт синыфтары урыҫ синыфынан бер ни менән дә айырылмай, тиерлек. Тел һәм әҙәбиәт дәрестәренән башҡа, бөтә фәндәр ҙә урыҫ телендә үтә бит.*



МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БӘХЕТЛЕЛӘРГӘ...
## ...күк ҡабағы асылыр

Ҡәҙер кисе Рамаҙан айының 26-нан 27-нә ҡараған төнөндә булырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) Ҡәҙер кисен Рамаҙан айының һуңғы ун көнлөгөнөң бер таҡ көнө кисендә эҙләргә ҡушҡан. Тап шул төндә Аллаһ Ябраил фәрештә аша Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) ерҙәге илсеһе итеүен хәбәр иттерә һәм Ҡөрьән аяттары күндерә башлай. Был төндә шулай уҡ Аллаһы Тәғәлә киләһе йылға һәр кешенең яҙмышын билдәләй, йәғни һәр әҙәмдең йыл буйына бөтә ҡылығы (изгелеге лә, яуызлығы ла) яҙып барылған Ғәмәл дәфтәре алмашына. Ҡәҙер кисендә таң атҡанға тиклем Ер йөҙөнә фәрештәләр төшөп торор, улар мөьминдәргә Аллаһтың сәләмен, әмерен, бер йыллыҡ яҙмыштарын еткерер. Шуға ла ул кис ғәрәпсә Ләйләт әл-ҡадр, йәғни тәҡдирҙәр хәл ителәсәк кис, тип атала.

"Уның бер кисе башҡа мең кистән хәйерлерәк", ти Изге китап. Шуның өсөн дә мосолмандар был төндө йоҡламай үткәрә - ғибәҙәт ҡыла.

Ҡәҙер төнө - ул ете төн уртаһында күк ҡабағының асылып китеүе. Күк ҡабағы асылғанда, ҡибла яҡтан күк ярылып, шул тиклем яҡтыра, хатта ерҙә ятҡан энәне лә күрергә мөмкин, ә ошо мәлдә күктә ожмах күренә, ти. Ләкин ул лайыҡлы, бәхетле кешеләргә генә асыла. Күп кеше йәнәш ултырып та араларынан берәүһе генә күреүе ихтимал. Ҡәҙер төнө асылғанда, теләгең тормошҡа аша.

"Ә ниндәй зиҡр-тәсбихтәр әйтергә һуң?" тип һорай Ғәйшә (радиаллаху анх) бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттән (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм). "Йә, Раббым! Һин ғәфү итәһең, һин ғәфү итергә яратаһың, шулай икән, мине лә ғәфү ит, тип доға ҡыл", - ти бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм).

Хәҙистә: "Ҡәҙер кисенең өҫтөнлөгөнә һәм изгелегенә ышанған, фәҡәт Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылған һәм уның хуплауын көткән кешенең бөтә гонаһтары ла кисерелә", - тиелә.

Был төндө лайыҡлы үткәрергә теләгән уҡыусыларға ошоларҙы иҫкә төшөрөп уҙғы килә:

1. Ҡәҙер төнөндә ихлас күңелдән күп доғалар әйтергә, үҙеңдең аңында Аллаһҡа ҡоллоҡ итеүҙе нығытырға кәрәк.
2. Ҡөрьән уҡырға йәки тыңларға, уның һүҙҙәре тураһында уйланырға, уға ҡарата мөхәббәтеңде нығытырға кәрәк.
3. Аллаһ илсеһе өсөн күп доғалар әйтеү һәм Уға маҡтауҙар килтереү, Ҡиәмәт көнөндә уның ярҙамына өмөт итергә, тағы ла бер тапҡыр Уның өммәтендә булыу нимә аңлата икәне тураһында уйланыу мөһим.
4. Дини әңгәмәләрҙә ҡатнашыу һәм вәғәздәр тыңлау файҙалы. Тағы ла бер тапҡыр дини ҡәрҙәшлек, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт аңлатмаларының әһәмиәте тураһында уйланырға кәрәк.
5. Гонаһтарың өсөн ғәфү үтенергә, күп тәүбәләр әйтергә кәрәк.
6. Зиҡрға бирелеп китергә, йәғни, Аллаһтың исемдәре һәм сифаттары тураһында фекер йөрөтөргә кәрәк.

Ҡәҙер кисенең серҙәренә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылып, ерҙәге маҡсаттарынды ҡушмай, ике йөҙлөлөк һәм ҡупырайыусанлыҡ менән бысратмай, даими ураҙа тотоп, намаҙ уҡып, ысын күңелдән зәкәт биреп кенә төшөнөргә мөмкин.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# НИНДӘЙ ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШЕҮ...
## атай-әсәйең иркендәме?

**Телебеҙгә ҡағылышлы мәҡәләләрегеҙҙе уҡып, ҡайҙа ҡыуанып, ҡайҙа әсенеп ҡуям, ҡайһы саҡта фекер алышҡы килеп китә. Был мәсьәләлә уфтандырғаны күберәк, әлбиттә, әммә Ҡол Дәүләт мәрхүм әйтмешләй, өндәшмәүебеҙ етешһеҙлектәрҙе күрмәүҙән түгел, ә һыр бирмәҫкә тырышыуҙан, сүпте өйҙән сығармаҫҡа, тип ҡарауҙан бит.**

Әле булһа ҡайһы берәүҙәр башҡортса аралашыуҙы ауыл еренә генә бәйләй. Һүҙ юҡ, заманында телебеҙҙе һаҡлап ҡала алыуыбыҙ ауылдарыбыҙҙың тәрән тамырлы булыуынан ул. Бөгөн иһә, ҡала мәктәптәрендә лә, балалар баҡсаһында ла әсә телендә уҡытыу, тәрбиә биреү мөмкинлеге бар. Бөтәһе лә ата-әсә теләгенән генә тора. Шулай ҙа һайлау мөмкинлеге булған ерҙә бөгөн дә ҡайһы берәүҙәр балаларын урыҫ синыфына ултыртыуҙы өҫтөн күрә. "Балам белемлерәк, ҡыйыуыраҡ, үткерерәк булһын, ҙур эштәргә өлгәшһен", - тип ебәрә улар.

Дөрөҫөн әйткәндә, ҡала мәктәптәрендәге башҡорт синыфтары урыҫ синыфынан бер ни менән дә айырылмай, тиерлек. Тел һәм әҙәбиәт дәрестәренән башҡа, бөтә фәндәр ҙә урыҫ телендә үтә бит. Тәбиғәт күренештәрен аңлатҡан тәбиғәтте өйрәнеү, география дәрестәре үҙ телеңдә уҡытылмаһа, үҙ тәбиғәтеңдә, үҙ илеңдә, үҙ ереңдә һөйөү ҡайҙан килһен инде? "Имән" тип әйтеү менән бала Алпамышаны күҙ алдына килтерһә, "шишмә" тигәндә ҡоштар тауышын ишетһә - бына ҡайҙа ул туған тел моңо! Ана шуны аңламаған ата-әсәне аңлай алмамдыр. Ә бына башҡорт телендә һөйләшә алыуҙан мәхрүм милләттәштәрем менән яҙмыш йыш осраштырып тора. Уларҙың күңел әсенеүҙәрен тыңлауы ауыр хатта. "Мин дә һеҙҙең кеүек башҡортса аралашҡым килә, һөйләшегеҙ минең менән башҡортса", - тип өҙлөкһөҙ ялбара торғайны Хәйбулла егете Өфөлә уҡыған саҡта. Ә беҙ күмәк булһаҡ та, уға аңлауы еңел булһын, тип, урыҫсаға күсә лә китә торғайныҡ. Сиҙәм ерҙәр күтәреү һөҙөмтәһендә боронғо башҡорт ауылдарындағы мәктәптәрҙең тулыһынса урыҫса уҡытыуға күсеүе сәбәпсе ине уның телһеҙлегенә. Бөгөн егетебеҙ рәхәтләнеп башҡортса һөйләшә: беҙҙән түгел, балалар баҡсаһына йөрөгән ҡыҙынан өйрәнде ул телде. "Балам - уҡытыусым минең", - ти ул бөгөн.

- Телеңде белмәү - үҙ моңоңдан яҙҙырыуға ла бер аҙым. "Халыҡ йырҙарын шул тиклем тыңларға яратам, тик һүҙҙәрен генә аңлап етмәйем шул", - тине бер саҡ Сибай филармонияһында концертта йәнәш ултырған "мәрйә". Башҡорт йырҙарын күҙҙәренә йәш алып тыңлаған 40 йәштәр тирәһендәге был ҡатынды йыш осратам. Ул беҙҙеңсә беләлер, шуға концертҡа йөрөйҙөр, тип уйлай торғайным. "Үҙемдең яҙмышымды уйлап, үҙемде йәлләп илайым мин ошо зарлы моңға", - тине бер саҡ күршем мине аптыратып. Телһеҙ нисек ауыр икәнен ул үҙе генә беләлер. Беҙҙең кеүек ике теллеләр өсөн иһә был ҡыҙыҡ һымаҡ. Балаһы тиҫтерҙәре араһында тиң булыр, тип өмөтләнеп, урыҫса уҡытыу ғына түгел, өйҙә лә урыҫса һөйләшергә тырышҡан ғаиләлә үҫкән икән ул ҡатын. Өмөтө аҡланған атай-әсәйҙең: ҡыҙҙары табиплыҡҡа уҡып сығып, уңышлы эшләп йөрөй, урыҫсаны һыу кеүек белә. Әммә уны бәхетһеҙлек, кәмселек тойғоһо ташламай. Йән-тән тыныслығы юҡ, тиҙәр ундай саҡта. Быға заман ғәйеплеме, йәмғиәтме, ата-әсәме? Алтын урталыҡты нисек табырға һуң балаһының киләсәген уйлап өҙгөләнгән ата-әсәгә?

Яңы ғына тәпәй баҫып, "әннә", "әттә" тип теле асыла башлаған сабыйҙарға йәлләп бағам мин. Атай-әсәйең, ҡартатай-өләсәйҙәрең ниндәй телдә һөйләшеүеңде теләр икән һинең, Хоҙайҙың бәләкәй генә яҡлауһыҙ бәндәһе?.. Нисек кенә булмаһын, ниҙәр генә алдыңда тормаһын, ҡурайҙы, халҡыбыҙҙың моңон юлдаш итеп ал һин, балаҡай.

## ИРЕТ, ҠУРАЙ, ТУҢҒАН КҮҢЕЛЕМДЕ

Дейеү хәлендәмен...
Алдаҡ-ошаҡтарҙан миңрәүләнгән,
Көнсөл мыҫҡылдарҙан рәнйеү баҫҡан,
Аҫыл хазинаһы ятҡа күскән,
Башын ташҡа орор хәлгә еткән,
Әкиәттәге дейеү хәлендәмен.

Ғәҙел дейеү!
Бала саҡтан килгән әкиәтем
Тормошома бөгөн ялғана,
Йондоҙ булып сәсрәр өмөттәрем
Ҡоҙоҡ төптәрендә алдана.

Ҡараңғылыҡ. Күҙһеҙ эҙләнеүҙәр
Таш бүлкәттә генә ҡаҡлыға.
Үҙ моңомдо, хәтеремде ялғар
Ҡурайғынам! Килсе яныма!

Юлын бөтәйт ҡайтыр Буранбайҙың,
Мөхәббәтен яңырт Сибайҙың,
Ете йондоҙ булып Ете ҡыҙың
Юл башлаһын ете ырыуҙың.

Ҡайтар, ҡурай, миңә хәтеремде
Шау шишмәләй аҡһын йәштәрем.
Сафланайым.
Ҡайтҡан хазинамдан
Йөрәгемә тулһын дәрттәрем.

Ирет, ҡурай, туңған күңелемде:
Сыңрау торна булып ураһын,
Ирәндеген табып, иркәләнһен,
Йәнгүзәйен күреп ҡыуанһын.

Ҡурай арбай. Ҡурай моңға сорнай,
Миңрәүҙәргә хәтер өләшә.
Томан булып баҫҡан аҡылдары
Вайымһыҙлыҡ менән көрәшә.

Әкиәттәге дейеү хәлендәмен...
Ҡурай тыңлап тәңгә кәр керә,
Урал тауҙарына олғаштырып,
Тыуған моңом йортҡа йән өрә.

**Г. ҒӘЛИАСЛАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Дүртөйлө районы ауыл хужалығы етештереүселәре беренселәрҙән булып ураҡты тамамланы. Район игенселәре 35 мең 100 гектар майҙандан 81 мең тонна иген йыйып алды. Гектарынан уртаса уңыш 26 центнер самаһы тәшкил итә.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов 49 әсәгә "Әсәлек даны" миҙалы тапшырҙы. Хәҙер инде республикабыҙҙа бындай хөрмәткә лайыҡ булыусы ҡыҙ-ҡатындар һаны 4500-гә етте. Булып үткән тантанала шулай уҡ Дыуан районынан Беляевтар һәм Дүртөйлө ҡалаһынан Мартышиндарҙың күмәк балалы ғаиләләренә "ГАЗель" микроавтобустары асҡыстары ла тапшырылды.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Силәбе өлкәһендә булды. Силәбе өлкәһе республикабыҙҙың Урал федераль округындағы иң төп партнеры. Ике төбәк сәнәғәт өлкәһендә, тауар әйләнеше буйынса, мәҙәниәт, мәғариф тармағында уңышлы хеҙмәттәшлек итә. Өлкәлә 166 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, ул төбәк халҡының 4,6 процентын тәшкил итә. Өлкәнең 60 белем биреү учреждениеһында 4100-гә яҡын бала башҡорт телен өйрәнә.

✓ Өфөгә Ҡалмыҡ Республикаһы Хөкүмәтенең махсус вәкиле Василий Лиждаев килде. Уның Башҡортостанға эш сәфәренең маҡсаты - "Бөйөк ебәк юлының эҙҙәре буйлап" халыҡ-ара ғилми экспедицияһын ойоштороу менән бәйле мәсьәләләр буйынса фекер алышыу. Экспедиция республика биләмәһе аша үткәндә уны матди яҡтан тәьмин итеү, аттар һатып алыу, бергәләп мәҙәни саралар уҙғарыу мәсьәләләре лә тикшерелде. Планлаштырылғанса, экспедиция маршруты Сибай һәм Баймаҡ ҡалалары, шулай уҡ Йылайыр, Ейәнсура һәм Күгәрсен райондары аша үтәсәк.

✓ 17-18 сентябрҙә Өфөлә VI республика йәш журналистар фестивале үтәсәк. Унда республиканың йәш журналистары төрлө темаларға арналған дискуссияларҙа, түңәрәк ҡорҙарҙа ҡатнашасаҡ һәм фекер алышасаҡ.

✓ 27 сентябрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры "Алтынай" студияһы "Тәгәрәп китте йомғағым" тигән театрлаштырылған тамаша ойоштора һәм унда балаларҙы саҡыра.

АҘНА ШАНДАУЫ

# ЯҢЫ РӘСӘЙ-ЧЕЧЕН "ҺУҒЫШЫ" БАШЛАНДЫ, ТИП ТОРАМ,

## йәки Чечен менән урыҫ ҡауышһа, дауыл сығамы?

**Йәмәғәт, был юлы сәйәсәт хаҡында бер һүҙ ҙә булмаясаҡ. Күҙәтеү, аңлауыбыҙса, үҙҙәрен был донъяның "тормош тотҡалары" тип һанаусылар араһында барған ыҙғыш хаҡында. Йәғни, "фронт"тың бер яғында өләсәй Алла Пугачева һәм әсә кеше Кристина Орбакайте, икенсе яҡтан иһә - атай кеше Руслан Байсаров. Ыҙғыш сәбәбе - Дени. 11 йәшлек малай. Әсәһе яртылаш урыҫ, яртылаш литва милләтенән. Атаһы - чечен. Был бала - уртала. Әлеге лә баяғы хәрби терминология менән файҙаланғанда - нейтраль һыҙатта. Тәү ҡарашҡа, тыныс урын кеүек. Төптәнерәк уйлаһаң, ҡапма-ҡаршы уттың ҡап уртаһында. Теге яҡтан да ут яуҙыралар бит, был яҡтан да.**

Аҙна буйына бөтә Рәсәй халҡы Пугачева-Орбакайте ғаиләһендәге ҡаңғырыҡты ҡыҙыҡһынып күҙәтә. Күҙәтмәҫ тә ине, көсләп тиерлек тағалар бит. Үткән аҙнала ваҡытлы матбуғат сараларында көнүҙәк мәсьәлә нимә булды, тип уйлайһығыҙ инде? Путин да, Медведев та түгел. Орбакайте менән Байсаровтың талашы. Гәзиттәрҙең беренсе биттәрендә Орбакайте, Пугачева һәм Байсаров, уларҙың матур төҫлө фотолары, яңғырауыҡлы баш һүҙҙәре. Әлеге лә баяғы хәрбиҙәрҙең лексикаһын ҡулланғанда, ике ҡаршы тороусы яҡ баштан уҡ ауыр артиллерияны ҡуллана башланы. Эре матбуғат агентлыҡтарында ойошторолған матбуғат конференциялары, күренекле адвокаттар, ҡырҡыу белдереүҙәр. Орбакайте бигерәк ҡыландырҙы. Уның һәм уның адвокатының ауыҙынан "хыянатсы" (баланың тәрбиәсеһе хаҡында), Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы һәм Ҡыҙыл Тәре (был инде Кристина Орбакайте киләсәктә мөрәжәғәт итәсәк халыҡ-ара ойошмалар) тигән һүҙҙәр яңғыраны. Ә ҡайһы бер ваҡытлы матбуғат саралары баланың өләсәһе Алла Пугачева Руслан Байсаровты аҡылға ултыртыу маҡсатында хатта үҙенең элекке дуҫы Әзербайжан президенты Илһам Әлиевка мөрәжәғәт итмәксе, имеш, тип хәбәр итә. Әйткәндәй, күптән түгел генә Рәсәй Федерацияһының бала хоҡуҡтары буйынса уполномоченныйы итеп тәғәйенләнгән Алексей Головань үҙ эшмәкәрлеген Дени Байсаровтың әсәһе менән йәшәүгә хоҡуҡын яҡлап сығыш яһауҙан башланы. Үҙ сиратында Руслан Байсаров үҙенә союздаш итеп телән кемде түгел, ә Рәсәй төбәктәре башлыҡтары араһында иң абруйлы шәхестәрҙең береһе булған (был уның ваҡытында Рәсәй Президенты Владимир Путин менән спорт кейемендә осрашыуынан сығып яһалған һығымта) Рамзан Ҡадировты алды. Һуңғы көндәрҙә гәзит биттәрендә Рамзандың Дени һәм уның атаһы Руслан менән ҡосаҡлашып төшкән фотолары күпләп донъя күрҙе.

Фотоларҙы ҡарайым да, гәзиттәрҙе уҡыйым да, шаҡ ҡатам. Халыҡ-ара кимәлендәге низағың ары торһон! Хәйер, нишләп ары торһон әле? Был бит классик халыҡ-ара низағ. Тик айырым алынған бер ғаилә эсендә генә. Эйе, бер яҡтан, Руслан Сулимович, күренекле чечен тейптарының береһенең вәкиле. Был халыҡтың мәңгелек милли мираҫы һәм дини традициялары. Малай кеше атаһының ҡулы аҫтында үҫергә бурыслы, уға ҡатын-ҡыҙҙарҙың итәктәре араһында буталып йөрөргә түгел. Икенсе яҡтан, күп милләтле, улай ғына ла түгел, күп "аталы" (Алла Борисовнаның хәләл ефеттәрен иҫәпләп сығыу ғына етә, йәмәғәт. Егермеләп ир-ат, имеш) ғаиләлә тыуып үҫкән, бер ерҙә лә яҙылмауына ҡарамаҫтан, бөтәһенә лә билдәле булған "Бала һәр саҡ әсәһе менән ҡалырға тейеш", тигән совет "лозунгы"һының сағыу бер һынланышы булған Кристина Эдмундовна. Кем еңәсәк?

Өҫтәрәк "айырым алынған бер ғаилә" тураһында һүҙ ысҡындырғайным. Ғаиләме икән? Асыҡтан-асыҡ иғлан ителеүенсә, Кристина менән Руслан граждандар никахында йәшәгән кешеләр. Башҡортса уны икенсе төрлө атайҙар. Руслан Байсаровтың Интернетта осраған биографияһында әйтелеүенсә, ул 1990 йылдар аҙағынан бирле Кристина менән бергә тормош көткән, имеш. Йәғни, ҡағыҙ-фәлән юҡ: кисә ҡауышҡандар, бөгөн талашҡандар, иртәгә ташлашҡандар. Ә бала, иҫегеҙҙәлер, был икәү араһында. Атай ҙа ҡәҙерле уға, әсәй ҙә.

Хәйер, һүҙем ул хаҡта ғына түгел. Юғиһә, был мәҡәлә "һары матбуғат" биттәрендә донъя күргән күп һанлы материалдарҙан бер нәмәһе менән дә айырылмаҫ ине. Ә беҙ бит ундай гәзит түгел. Шуға күрә лә мәсьәләнең асылына күсергә ваҡыт. Әйтеүемсә, был низағты төрлө яҡлап яҡтыртҡан баҫмалар күп булды. Шуларҙың араһында берәүһендә донъя күргән мәҡәлә айырыуса ныҡ тәьҫир ҡалдырҙы. "Катнаш никах. Төрлө мәҙәни традицияларҙа тәрбиәләнгән кешеләр араһындағы союздарҙың ҡурҡынысы нимәлә?" тип аталған материал "Российская газета"ла донъя күрҙе. Рәсәй Хөкүмәтенең рәсми баҫмаһында, йәмәғәт. Был етди гәзиткә хас етди ҡараш менән Байсаров-Орбакайте ыҙғышы миҫалында илебеҙҙәге ҡайһы бер ғаиләләрҙә килеп тыуған һәм артабан да тыуасаҡ етди проблема асып һалына. Уны ниндәйҙер кимәлдә рәсми фекер тип ҡабул итергә лә мөмкин хатта. Автор Орбакайте-Байсаров конфликтын, бер илдә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, ҡапма-ҡаршы традицияларҙа тәрбиәләнгән кешеләр низағы тип баһалай һәм сит ил граждандарына кейәүгә сыҡҡан Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарының проблемаларын байҡап сыға. Мәҙәни код тигән ғәләмәт был. Икенсе төрләрәк әйткәндә, урыҫҡа рәхәт булһа, немецҡа - үлем. Мин әйтмәгән быны. Халыҡ әйткән. Күптән әйткән инде. Һаман да актуаль. Французға кейәүгә сыҡҡан Беленькая, Израилдәге ире менән балаһын бүлешә алмай аптыраған Юлия Оськина - миҫалдар бихисап. Эйе, йәнәһе, генетиктар фекеренсә, ҡатнаш никахтар файҙалы. Ҡан яңыра, генотип көсәйә. Ысынлап та, шулай микән? Ә бер милләттән булғандарҙың балалары, тимәк, Квазимодо булып сығамы?

Тағы ла бер мәсьәлә килеп тыуа. Мәҡәлә авторы ҡатнаш никахтар хаҡында яҙғанда, әзербайжандарҙы һәм ҡытайҙарҙы, төрөктәрҙе һәм ғәрәптәрҙе, немецтарҙы телгә ала, әммә, нишләптер, һүҙ Рәсәй граждандары булған чечен егете һәм урыҫ ҡыҙы хаҡында барһа ла, Рәсәйҙә йәшәгән башҡа милләттәр хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәй. Башҡорттар һәм татарҙар ҡатнаш никахтарға инмәйме әллә? Якут ҡыҙҙары тик үҙ милләт вәкилдәренә кейәүгә сығамы? Ә башҡа милләттәр һуң? Йәғни, сит ил ир-егете менән сәскә-сәс бәйләнешһегеҙ, мәҙәни кодығыҙ тап килмәүе мөмкин. Ә башҡорт менән урыҫ ҡауышһа, татар менән яҡут килешһә, сыуаш менән мари йәрәшһә, тимәк, кодыбыҙ уртаҡ булып сығамы? Әллә беҙ бөтөнләй мәҙәни кодҡа, йәғни, икенсерәк мәҙәниәткә эйә булмаған әҙәми заттармы? Эйе, һүҙ юҡ, Совет заманы беҙҙе байтаҡ тигеҙләне. Йышыпмы йышты, шымартты. Бер ҡалыпҡа индерергә маташты. "Совет кешеһе" ҡалыбына. Күпмелер индереп тә өлгөрҙө. Айырыуса, араҡы эсеү йәһәтенән. Хәҙер күнекмәгәнбеҙ. Бөтәбеҙ ҙә бер төрлө әсәбеҙ. Төп күтәрә һәм өсөнсө тост, мотлаҡ рәүештә, "мәхәббәт өсөн". Әле лә, заманалар үҙгәрһә лә, заманалар ғына түгел, дәүләт ҡоролошо пыранзаран килтерелеп, ҡабаттан ҡоролғанда, Рәсәйҙә йәшәгән милләттәргә (милли аҙсылыҡ тип әйтеүе лә оят) мөнәсәбәт һаман элеккесә. Милләт тураһындағы яҙыуҙы паспорттарҙан алып ташлау, Үҙәктең һуңғы арала милли мәғарифты юҡҡа сығарыу йүнәлешендәге аҙымдары, ҡатнаш никахтарҙы хуплау - былар барыһы ла "рәсәйле" тигән яңы "милләт", ә дөрөҫөрәге, аморфлы, мәҙәниәте лә, сурты ла булмаған кешеләр ойошмаһы ("ойошҡан һалма", бер нәмәгә лә эшкинмәгән нәмә мәғәнәһендә) барлыҡҡа килтереү маҡсатында атҡарылған эш. Уйлап, планға ярашлы эшләнәме ул? Әллә осраҡлы рәүештә генә шулай килеп сығамы? Киләсәк өсөн ҡурҡыныс.

Орбакайте-Байсаров миҫалы океанда йөҙөп йөрөгән боҙлотауҙың өҫ яғы ғына. Аҫта был икәү кеүек бай, күренекле һәм популяр булмағандар ҙа ҡатнаш никахта шундай уҡ мәҙәни шок кисерә. Ирҙең һәм ҡатындың ҡылыҡтарында, ғәҙәттәрендә, атлап йөрөү һәм йоҡлап ятыуҙарында аңлашылмаған, күнелгә ятышһыҙ, килбәтһеҙ һәм дә мәғәнәһеҙ тойолған нәмә күп. Йәш саҡта ундайҙарға түҙергә мөмкиндер. Әммә йәшәй төшкәс тә күнегелмәй, киреһенсә, күнелде ҡырып, аптыратып, екһендереп торалыр ул. Таныштарым бар - ғүмер буйы мәрйә менән йәшәп тә, ҡартайған көндә үҙ башҡортона өйләнеп, яңынан тормош ҡороп алып китергә көс тапты улар. Ә күпмеләр таба алмай? Улар бит үҙҙәренә ярҙамға төрлө кимәлдәге уполномоченныйҙарҙы һәм Ҡыҙыл тәре менән Берләшкән Милләттәр ойошмаһын саҡыра алмай ҙа баһа. Туйып шашҡандарҙың ғаилә низағынан башлап алып китте лә, ана ҡайҙа алып барып сығарҙы, тиерһегеҙ, моғайын. Улар ҙа беҙҙең һымаҡ кешеләр бит...

Хәйер, бәлки, был ҡаңғырыҡты үҙҙәренә көсләрәк иғтибар йәлеп итер, популярлыҡтарын арттырыр һәм ошо бысраҡ "тулҡын"да аҡса һуғып ҡалыр өсөн (яңы концерттар ойоштороу, яңынан-яңы дискылар һатыу юлы менән) Алла Пугачева менән Кристина Орбакайте уйлап сығарғандыр? Бәлки, Байсаров менән Орбакайте бер баланы икегә күптән бүлеп тә ҡуйғандыр, ә? Бәлки, "мәҙәни шок" тигәндәре уларҙың ошолайтып бар ғаләм алдында бала бүлешеүҙән ғибәрәттер?

**Тәһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Граждандарҙың күп һанлы мөрәжәғәттәренән сығып, Башҡортостанда һалым хеҙмәте учреждениеларының эш сәғәттәре оҙайтыла. Көсәйтелгән эш режимы йыл аҙағына тиклем дауам итәсәк.

✓Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының Йәштәр советы Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында үҙ бүлексәләрен һәм Халыҡ сәйәсәте мәктәбен ойоштороорға ниәтләй. Бындай идея Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында, иң тәүҙә Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта башҡорт йәштәре диаспораһы артыуы сәбәпле тыуҙы. Һуңғы ваҡытта ғына ошо ҡалаларҙың уҡыу йорттарына 130-лап егет һәм ҡыҙ уҡырға китте. Йәштәр советының тағы бер яңы проекты - Халыҡ сәйәсәте мәктәбен булдырыу. Унда башҡорт йәштәре ойошмаларынан, башҡорт гимназияларынан һәм лицейҙарынан тынлаусылар конкурс буйынса һайлап алынасаҡ. Йәш сәйәсмәндәр, ғалимдар, дәүләт хеҙмәткәрҙәре был мәктәп лекторҙары була ала.

✓Бөгөндән республикала традицион көҙгө йәрминкәләр башлана. Был юлы ауыл хужалығы етештереүселәре Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаларында үҙ тауарын тәҡдим итәсәк. Ә Өфөлә бындай йәрминкәләр 19 сентябрҙә башлана. Өфөнөң һәр районына аҙна һайын 7-15 район сауҙа итергә киләсәк. Йәрминкәләр 29 ноябргә саҡлы дауам итәсәк. 12 декабрҙән 27 декабргә тиклем Яңы йыл йәрминкәләре башланасаҡ.

✓Яңы уҡыу йылы башланыу менән дөйөм белем биреү учреждениеларында Бөтә Рәсәй олимпиадаларына әҙерлек башланды. Олипиада 21 предмет буйынса үтәсәк. Ул октябрҙә старт алып, республиканың барлыҡ мәктәптәрендә үткәрелә. Тәүге этапта еңеүселәр муниципаль кимәлдә, шунан ҡышҡы каникулдар ваҡытында өсөнсө региональ этапта көс һынашасаҡ. Йомғаҡлау этабы яҙ көнө үтә. Былтыр республиканан 87 бала ошо олимпиада еңеүсеһе булды.

✓Өфөлә "Йәштәргә - эш!" республика акцияһы булып үтте. Сарала бөтә милекселек формаһындағы предприятиелар, ойошмалар һәм учреждениелар үҙ вакансияларын тәҡдим итте. Ошондай уҡ акция башҡа ҡалаларҙа ла үтәсәк.

✓Сентябрь аҙағында Өфөлә "Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балаларҙы ғаиләгә урынлаштырыуҙың төрҙәрен үҫтереү: тәжрибә, проблемалар, перспективалар" темаһына асыҡ ҡала ғилми-ғәмәли конференцияһы үтәсәк.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ЗАКОН БОҘҺАҢ, ҡаты яза көт

**Һуңғы ваҡытта республиканың федераль миграция хеҙмәткәрҙәре тарафынан законһыҙ миграция ойоштороусыларҙы Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 322.1 статьяһына ярашлы яуаплылыҡҡа тарттырыу осраҡтары йышайҙы.**

Әйтергә кәрәк, миграция өлкәһендә был статья иң "ҡурҡынысы" һанала, сөнки уға ярашлы тәртип боҙоусыны ике йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү, йәиһә һәр бер сит ил гражданына 200 мең һумға тиклем штраф һалыу ҡаралған. Мәҫәлән, эшләргә хоҡуҡ биреүсе документһыҙ бер генә гастарбайтерҙы эш йә иһә торлаҡ менән тәмин итеү шулай уҡ үрҙә телгә алған статьяға ҡарай.

2009-сы йылдың башынан алып ҡына ла республиканың Федераль миграция идаралығы хеҙмәткәрҙәре үткәргән профилактик саралар һөҙөмтәһе буйынса 30 законһыҙ миграция ойоштороу факты асыҡланды. 14 факт буйынса Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 322.1 статьяһына ярашлы енәйәт эше ҡуҙғатылды һәм ҡалған материалдар буйынса тикшереү эштәре алып барыла.

Шулай, ошо көндәрҙә, Республиканың Федераль миграция идаралығының иммиграция контроле хеҙмәткәрҙәре Ҡырмыҫҡалы районынында алып барған тикшереү барышында Подлубово ауылында теплицалар төҙөү менән мәшғүл булған 10 ҡытай гражданына тап булдылар. Документтарҙы тикшереү барышында ҡыҙыҡ фактар асыҡлана. Беренсенән, был сит ил граждандары бер ниндәй теркәүгә тормайынса, эшләргә рөхсәт биреүсе документтарһыҙ эшләп йөрөгән булған. Икенсенән, эш биреүсе миграция закондарын белә тороп, бындай аҙымға барған. Эш шунда: был эш биреүсе бейыл миграция хеҙмәтенә сит ил граждандарын йәлеп итергә рөхсәт һорап, ғариза яҙған булған. Әммә, мигранттарҙың буласаҡ йәшәү урынын тикшереп, миграция хеҙмәткәрҙәре уға сит ил граждандарын йәлеп итергә рөхсәт бирмәгән. Сөнки йәшәү урыны бер ниндәй санитар нормаларға яуап бирмәгән була. Шул ваҡыттан алып яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр булмағандыр инде, күрәһең. Эш биреүсе федераль миграция хеҙмәтенең талаптарын һанға һуҡмай, сит ил эшселәрен йәлеп итә. Ҡытай граждандары ошо фермала уҡ йәшәгән һәм эшләгән. Һөҙөмтәлә Ҡырмыҫҡалы районы суды ун ҡытай гражданын Рәсәй биләмәләренән ҡыуырға тигән ҡарар сығара.

Әлеге ваҡытта был мигранттар Өфөнөң сит ил граждандарын ваҡытлыса тотоу үҙәгендә. Ә эш биреүсегә закон алдында яуап тоторға тура киләсәк.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# КӨҘГӨ ЙӘРМИНКӘЛӘ...

## муллыҡ йөрөй аяҡланып




**Үткән шәмбелә Өфө ҡалаһының Октябрь районында урынлашҡан Жилино һәм Зинино ауылдары араһында "Зинино" тип аталған ауыл хужалығы йәрминкәһе асылды.**



Объектты төҙөү эштәрен Өфө ҡалаһының "Колхоз баҙары" сауҙа комплексы һәм "Меркурий" сауҙа үҙәге алып бара. Йәрминкә комплексы составында "Экологик агромаркет", "Барыһы ла өй һәм баҡса өсөн" павильондары эшләйәсәк. Унда республиканың ауыл хужалығы етештереүселәренең аҙыҡ-түлек тауарҙары һатыласаҡ, фермер хужалыҡтары, баҡсасылар өсөн дә асыҡ прилавкаларҙан урын биреләсәк. Бында шулай уҡ машиналарҙан һатыу өсөн йәрминкә майҙаны, 350 урынға иҫәпләнгән автомобиль ҡуйыу урыны, дөйөм тукланыу пункттары, сауҙа киоскыһы булған автобус туҡталышы булдырылған. Һатыусылар һәм һатып алыусылар өсөн тәүлек әйләнәһенә еңел һәм йөк автомобилдәре ҡуйыу майҙаны, ветеринар контроль һәм инвентарь йыуыу посы йыһазландырылған.

Йәрминкәгә байтаҡ ҡына һатып алыусы йыйылғайны. Бында бөтә төр емеш-еләк, йәшелсә, ит, һөт аҙыҡтары, икмәк, кондитер изделиелары, бал, сәскә, ағас үҫентеләре, хатта тереләй ҡошҡорт, һарыҡ, страус һатып алырға мөмкин ине. Ҡайһы бер предприятиелар үҙҙәре етештергән аҙыҡты һатып алыусы ихтыярына тәмләп ҡарарға тәҡдим итте. Ойоштороусылар әйтеүенсә, йәрминкәгә Дәүләкән, Мәсетле, Иглин, Мәләүез, Әлшәй, Ҡырмыҫҡалы, Архангель, Борай һәм башҡа райондарҙан төрлө тауарҙар тейәлгән йөҙгә яҡын машина килгән. Тап ошондай йәрминкәләрҙә ҡала халҡы ҡышҡылыҡҡа запас йыйып алып ҡалырға тырыша ла инде, сөнки тауарҙарҙы етештереүселәрҙән үҙҙәренән алғас, ул ышаныслы һәм магазин хаҡтарынан күпкә арзанырaҡ килеп сыға.

**Әйткәндәй, йәрминкә көн һайын сәғәт иртәнге туғыҙҙан киске һигеҙгә тиклем эшләйәсәк. Унда "Зинино ауылы" туҡталышына тиклем Көньяҡ автовокзалдан 124-се, "Дан бульвары" туҡталышынан 124-к, "Сипайлово" һауыҡтырыу комплексынан 278-се һанлы автобустар менән барып етергә мөмкин.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әлмира ХӘЙРЕТДИНОВА, Орджоникидзе районы Александровка ауылы:** Сәскә үҫтерергә бала саҡтан яратам. Тәүҙә уларҙы үҙем өсөн, матурлыҡ өсөн үҫтерҙем, хәҙер, хаҡлы ялға сыҡҡас, баҙарға алып сығып һата башланым. Был шөғөлөм бик оҡшай, өйҙә тик ултырғансы, ваҡыт та үтә, ҡулға бер ни тиклем аҡса ла төшә. Унан һуң, ошо матурлыҡты кешеләргә өләшеү кинәнесе генә үҙе ни тора бит! Сәскәләре үҫеп киткәс, хужабикәләр килеп рәхмәттәрен әйтеп китә, быларын ишетеүҙән тағы ла ҡыуаныслыраҡ, күңеллерәк булып китә, йәшәү көсө арта. Сәскәләрҙе үҫтергән һайын күберәк үҫтерге, төрләндерге килә. Әле лилиәнең генә дүрт, фуксияларҙың ун һигеҙ төрө бар. Лилиәләрҙе көҙөн дә, яҙын да ултыртырға мөмкин. Көҙҙән ултыртып ҡалдырғандары иртәрәк шытып сыға һәм тәүҙәрәк сәскә ата. Йәрминкәгә шулай уҡ ярангөл, фуксия, бимерия, белоперония, фоя, әрҙәс гөл, примула гөлдәре, тағы ла баҡса сәскәләре алып килдем.

**Риф ШӘҮӘЛИЕВ, Иглин районы Ләмәҙ ауылы:** Умартасылыҡ менән шөғөлләнеүемә ун дүрт йыллап бар. Дүрт рам пакеты һатып алып башлап ебәргәйнем, икенсе йылына ике оя ҡорт барлыҡҡа килде. Аҙаҡ дүртәү, етеү, ә инде ете йылдан үҙем күс һата башланым, әлеге көндә хужалыҡта алтмышлап умартам бар. Умартасылыҡ эше бик ҡатмарлы, бигерәк тә йәй көнө эше күп. Ярай әле, балаларым был шөғөлдә эт итмәй, өсөһө лә ихлас ярҙамлаша. Йыл һайын бал йәрминкәһендә ҡатнашабыҙ, шуға ла беҙҙең даими клиенттарыбыҙ бар. Беҙҙең йүкә балын Мәскәү, Санкт-Петербургка алып киттеләр, былтыр Америкаға кәрәҙле бал һатып ебәрҙек. Уңған булһаң, эшеңдә намыҫлы башҡарһаң, был бик табышлы шөғөл.

**Динара ИШБУЛАТОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Йәштәр хоккей лигаһы старт алды. Ошо уңайҙан хоккейсыларҙы Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡотланы. Лиганың 22 клубы иҫәбендә беҙҙең "Толпар" командаһы ла бар. Старт матчтарында "Толпар" Новокузнецк командаһын ике тапҡыр еңеүгә өлгәште.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә "Роспотребсоюз"дың Башҡортостан бүлексәһе етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова дөйөм белем биреү мәктәптәренең яңы уҡыу йылына әҙерлеге тураһында мәғлүмәт бирҙе. Балаларҙың һаулыҡ торошона ҡағылып, сығыш яһаусы Өфөләге бөтөнләй һау-сәләмәт булған балалар төркөмөнөң тағы ла кәмей төшөүен һәм 13,7 процент тәшкил итеүен билдәләп үтте.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә хеҙмәттәшлек тураһында өс яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документҡа баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, БР ауыл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары Николай Коваленко һәм 46 сауҙа ойошмаһы директорҙары үҙ ҡултамғаларын ҡуйҙы. Килешеүҙең маҡсаты - сауҙа хеҙмәте сифатын яҡшыртыу, урындағы тауар етештереүселәрҙе яҡлау һәм улар етештергән продукцияны төбәк баҙарына үткәреү.

✓22-25 сентябрҙә Өфөнөң Эшҡыуарҙар союзы "Аҡбуҙат" ипподромы манежында "Урал төҙөлөш индустрияһы - 2009" форумы һәм "Аҙ ҡатлы төҙөлөш" республика махсус күргәҙмәһе ойошторасаҡ. Күргәҙмәләр сиктәрендә "Ер һәм милек мөнәсәбәттәре өлкәһендә бәләкәй һәм урта бизнес проблемалары" темаһына түңәрәк ҡор ҙа үткәреләсәк. Һорауҙар һәм тәҡдимдәр менән 241-47-44 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓Өфө ҡала округы Советы депутаттары Дим районындағы яңы урамға башҡорт халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең исемен биреү тураһында ҡарар итте.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына шәкәр диабеты сирен иҫкәртеү һәм асыҡлау өсөн юғары технологиялы ете медицина аппараты тапшырҙы.

АФАРИН!

**Баш ҡалала Бөтә Рәсәй орлов юртаҡ аттары фестивале һәм Урта һәм Ҡара диңгеҙ илдәре юртаҡ аттарын өйрәтеүселәрҙең Халыҡ-ара чемпионаты үтте. Ул көндә Өфөнөң Таһир Кусимов исемендәге "Аҡбуҙат" ипподромына Рәсәйҙең ун республикаһы һәм өлкәһенән, Европаның 12 иленән вәкилдәр, спортсылар йыйылды.**



# АТЫҢДЫ МАҠТАР АЛДЫНАН...

## ярыштырып ҡара, ти йола

Бына бер нисә йыл дауамында былдай оло сараны үткәреү урыны итеп Башҡортостан бушҡа ғына һайланмай, бөгөн республика ҡымыҙ һәм йылҡы ите етештереү буйынса ғына түгел, ә тоҡомло аттар үрсетеү һәм ат спорты менән шөғөлләнеүселәр һаны буйынса ла алдынғы урында тора. Ат-спорт комплекстары, мәктәптәре, клубтары, йылҡы үрсетеү заводтары һәр районда тиерлек эшләй. Был турала үҙенең сығышында республика Президенты Мортаза Рәхимов та әйтеп үтте: "Башҡорт халҡының тормошонда борон-борондан ат ҙур урын алып торған, ә бөгөн ат, бал һәм ҡурай менән бер рәттән, Башҡортостандың символына әүерелгән. Республикала йылҡысылыҡҡа, йылҡы үрсетеү заводтары һәм ат спортына дәүләт ярҙамы күрһәтеү буйынса маҡсатлы программалар тормошҡа ашырыла. Башҡортостан йылҡы иҫәбе буйынса ла Рәсәйҙә беренсе урында тора. Был спорт төрө менән 2500 спортсы шөғөлләнә, улар халыҡ-ара һәм бөтә донъя ярыштарында алдынғы урындарҙы яулай. Былдай үрҙәр яулауға республикала тыуҙырылған шарттар, ныҡлы матди-техник база булышлыҡ итә. "Аҡбуҙат" универсаль ат-спорт комплексы донъя стандарттарына яуап бирә, илдә былдай ипподромдар бер ерҙә лә юҡ".

Чемпионатта ҡунаҡ булараҡ ҡатнашыусы Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры урынбаҫары Александр Беляев та халыҡ-ара кимәлдәге бәйгене ойоштороу урыны итеп һайланған Башҡортостандың илдә иң үҫешкән һәм иҡтисади яҡтан тотороҡло төбәк булыуын айырым билдәләп китте.

Бәйге башланып, төрлө номинациялар буйынса приздар уйнатыла башлағас та, Президенттың һүҙҙәрен дәлилләгәндәй, Башҡортостан юртаҡтары алдынғылыҡты бер кемгә лә бирмәне. Орлов тройкалары сығышында "Бәләкәй кубок"ты Дыуан районы алһа, дүрт йәш һәм унан олораҡ бейәләр араһында "Рәсәйҙең орлов юртаҡтары чемпионы" призының тәүге этабында Өфөнөң "Уралагротехсервис" йәмғиәте юртағы Ника еңеү яулап, яңы рекорд ҡуйҙы. "Рәсәйҙең киләсәге" призын Дүртөйлөнән Наталья Евстигнеева етәкселегендә Завет исемле туры ҡолон яуланы. Пермь, Силәбе, Һамар аттары ла яҡшы һөҙөмтәләргә ирештe. Ә Урта һәм Ҡара диңгеҙ илдәре юртаҡ аттарын өйрәтеүселәрҙең Халыҡ-ара чемпионаты призына француз ат өйрәтеүсеһе Жан-Поль Фаскуель лайыҡ булды.

Борондан йылҡы малы эйәһенә бол килтереүҙән бигерәк, дан килтереүсе булған. Ат менән маҡтаныу ҙа хилаф эш һаналмаған. Бөгөн дә республиканың төрлө ат-спорт комплекстары юртаҡтары донъя кимәлендә Башҡортостандың данын яҡлаусы булып тора, тип хаҡлы рәүештә маҡтана алабыҙ. Был ике сара ла Европа илдәре һәм Рәсәй төбәктәре менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен артабан да нығытасағына шик юҡ.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Динар ХАФИЗОВ, юртаҡ аттар тренеры, "Ҡара юрға" ат-спорт комплексы, Илеш районы:** Бөгөнгө көнгә беҙҙең комплекста 30 баш ат иҫәпләнә, улар араһында орлов, америка, рус тоҡомло аттар бар. Сит илдә орлов тоҡомона иғтибар ҙур булһа ла, беҙ башлыса башҡорт тоҡомло аттар менән шөғөлләнәбеҙ, уларҙы Шишмә йәки үҙебеҙҙең Илештә урынлашҡан Андреевка йылҡы үрсетеү заводтарына барып алабыҙ һәм өйрәтәбеҙ. Мин үҙем аттарҙы бала саҡтан яратам, шуға был спорт төрө менән шөғөлләнеү күңелемә шундай ҡәнәғәтләнеү һәм тыныслыҡ алып килә. Юртаҡ аттар менән төрлө илдәрҙә ярыштарҙа ҡатнашҡаным бар, Италия, Финляндия, Хорватия, Словенияла булдым, "Аҡбуҙат" ипподромының абсолют рекордын да мин ҡуйҙым. Республика Президентының иғтибарын һәм ярҙамын тойоп эшләйбеҙ һәм йәшәйбеҙ, Өфөлә Рәсәйҙә тиңе булмаған ипподром булыуы ла ошоно дәлилләй түгелме һуң?

**Илшат МӘХМҮТОВ, юртаҡ аттар тренеры, "Арғымаҡ" ат-спорт комплексы, Дүртөйлө ҡалаһы:** Ҡалала ат-спорт комплексы 27 йыл эшләй, орлов, рус, америка тоҡомло аттарҙы өйрәтәбеҙ. Бөтәһе 50 баш ат бар, егермегә яҡын бала был спорт төрө менән шөғөлләнә. Үҙем иҫ белгәндән алып аттар араһында үҫтем, атайым Лирон Биктимер улы аттарҙы бик ярата ине, ваҡытында Ҡыйғы районында тоҡомло аттар үрсетеүҙе лә ул башлап ойошторғайны. Миңә Чехияла, "Аҡбуҙат" ипподромында аттарҙы өйрәтеүсе булып эшләргә тура килде. Әлеге ваҡытта бәйгеләрҙә ҡатнашам, тоҡомло аттар сығарыу менән булышам. Был фестиваль һәм чемпионаттың тап Өфөлә үтеүе беҙҙә ат спортының юғары кимәлдә булыуына ишара, бар спортсылар исеменән тыуҙырылған шарттар өсөн республика һәм район етәкселегенә оло рәхмәтемде белдерәм.

**Йоуко ТАРВАЙНЕН, Финляндия:** Рәсәйҙә барлыҡҡа килгән орлов тоҡомло аттар бөгөн беҙҙә лә юғары баһалана, уларҙың матурлығы, сыҙамлығы барыһын да һоҡландыра. Башҡорт тоҡомло аттар, йәшеллек иле Башҡортостан тураһында ишеткәнем бар ине, бына, килеп күреү бәхетенә лә ирештем. Өфө ҡалаһы беҙҙә тик ыңғай тәьҫирҙәр генә тыуҙырҙы, бындағы ипподром да сифатлы итеп, ҙур зауыҡ менән төҙөлгән, кешеләр ҙә ихлас. Беҙҙе бында бер нәмә генә аптыратты: ярыштар барышында ҙур ставкалар ҡуйып, кешеләр аҡса эшләргә ынтылмай. Билдәле булыуынса, ат ярыштарын табышлы бизнесҡа әүерелдерергә мөмкин, беҙҙә тик ошо юл менән аҡса табып йәшәгән кешеләр бар. Был, моғайын да, башҡорт халҡының атҡа ҡарата айырым мөнәсәбәте менән бәйлелер.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

Аһ-Аһ!

# МУЙЫЛ УҢҺА...

## халыҡ ҡотора

Быйыл ҡоролоҡ булып, ауылда еләк бешеп өлгөрмәҫ элек үк кибеп ҡалһа ла, уның ҡарауы, муйыл ҡотороп уңды. Уның бер нисә йыл инде был тиклем мул уңыш биргәне юҡ ине. Тик ҡыҙғаныс: муйылдың ҡап-ҡара булып емешкә тулышып ултырыуы үҙ башына ғына булды. Ауыл халҡы был муллыҡҡа кинәнде, тик улар Аллаһы Тәғәлә биргән был ниғмәт менән әҙәмсә файҙалана белмәне, хайуандарса эш итте. Юҡ, хайуандарса тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, әгәр ҙә хайуандар улай ҡыланһа, күптән урмандарыбыҙ ҡырылып бөткән булыр ине. Халыҡ муйылды үҫеп ултырыусы ағас ише лә күрмәй, балта, бысҡы менән ботарланы, тиҙерәк емешен йыя һалып бөтөр өсөн уға ажарланып ташланды. Хатта ауылдаштарым "Дружба" бысҡыһын ҡулланыуға тиклем барып еткән. Был хәлгә хайран-вайран ҡалына, тәбиғәткә ҡарап, йөрәк өҙгөләнә. Был күренеште халыҡтың үҙе ултырған ботаҡҡа балта сабыуы тип атарғамы, әллә кешеләрҙең кешелек сифаттарын юғалта барыуына бер дәлил тип ҡабул итергәме? Белмәйем.

Әлбиттә, ауыл халҡы өсөн тәбиғәт биргән мөмкинлек менән файҙаланып, аҡса эшләп ҡалыу насар түгел. Әйткәндәй, кипкән муйылды халыҡтан ҡайһы ауылда килограмын 70 һум, ҡайһы ауылда 100 һум менән ҡабул итәләр. Муйыл һатып, балаларын кейендерерлек аҡса эшләүселәр ҙә бар. Һәйбәт бит. Тик ултырһаң, уныһы ла булмаҫ ине әле. Тик беҙ ниңәлер, тиҙ һәм күпте алырға, бөгөндө генә уйлап йәшәргә күнеккәнбеҙ. Әйтәйек, бөгөн беҙ муйылды ботарлап ырғытабыҙ икән, тимәк, киләһе йылдарҙа уңышһыҙ ҡалабыҙ түгелме һуң? Тимәк, күпте алырға тырышып, аҙына ла мохтажлыҡ ҡылып ултырасаҡбыҙ. Әгәр ҙә бөтә кешеләр ҙә нәфсеһенә хужа булып, сама белеп, тәртип күҙәтеп йәшәһә, бындай күңелде ҡырырлыҡ күренештәр ҙә булмаҫ ине.

Элек ауыл халҡы ер-һыуҙы ҡурсалаусы, милләтте һаҡлаусы, йола-ғөрөф-ғәҙәттәрҙе күҙәтеүсе сығанаҡ ине. Хәҙер ауылға ҡайтаһың да, быларҙың киреһен күреп, тәүҙә быға ышанмай, аптырап ҡалаһың, аҙаҡ күңелде ҡурҡыу ҡатыш хәүеф биләп ала. Бөгөн ауыл йәшәйешкә йән өрөүсе тереһыу түгел, ә уны упҡынға этәреүсе ҡараңғылыҡ кеүек. Ауыл халҡында ер, милләт тойғоһо юғала бара, иманын һатып эсеүселәр күбәйә. Был хәлде нисек төҙәтергә? Миңә ҡалһа, хәҙер уларға ҡалала йәшәүсе, милләтем тип яныусы, рухлы һәм аңлы зыялылар ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш. Тик нисек итеп, уныһын бергәләп уйлашайыҡ.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Үлән ванналары

Ҡомға ятыу умыртҡа бағанаһына, башҡа ағзаларға яҡшы тәьҫир итә, был процедура ваҡытында тән температураһы күтәрелеп, күп зарарлы микробтар юҡҡа сыға. Уны төрлө үлән ванналары менән ҡабул итеү яҡшыраҡ, әммә алдан табип менән кәңәшләшергә кәрәк.

### Ҡарағай энәләре төнәтмәһенән ванна

Бының өсөн ҡарағай энәләрен һәм тубырсыҡтарын кило ярым итеп йыйып, өҫтөнә һыуыҡ һыу ҡойоп, талғын ғына утта ярты сәғәт ҡайнатырға. Уттан алғас, өҫтөн ныҡлап ябып (эфир майҙары осоп сығып бөтмәһен өсөн), 12 сәғәткә төнәтергә ҡуйырға. Энәләрҙе һөҙөп ташлағас, һыуын ванналағы йылы һыуға ҡушырға. Был 37-38 градус йылылыҡтағы ваннаны 10 көн дауамында 10-15 минут тирәһе көн һайын да, көн аша ла инергә була. Һыу һыуынмаған икән, хәлегеҙгә ҡарап, ваҡытты 20 минутҡа тиклем еткерә алаһығыҙ. Был ваннаны нервы системаһы ҡаҡшағанда, тиҙ ярһып барғанда, артыҡ ауырлыҡтан, йоҡоһоҙлоҡтан яфаланғанда, ҡулдар, аяҡтар һыҙлағанда, быуын ауырыуҙары булғанда, төрлө ҡаты сирҙәр үткәргәндән һуң ҡулланырға кәңәш итеlә. Был ваннаға ҡарағай энәләренән эшләнгән 20-30 тамсы май тамыҙып ебәрһәң, тын юлдарына һәйбәт булыр.

### Тоҙло ванна

2 килограмм диңгеҙ йәки тәбиғи тоҙ эретелгән ванна тән тиреһен ҡуҙғытып, ҡан йөрөшөн шәбәйтә, һөҙөмтәлә матдәләр алышыныуы яҡшыра. Ҡан тамырҙарының тонусы күтәрелеп, бөтә организмда ҡан әйләнеше һәйбәтәйеп, фекерләү һәләте күтәрелә, аң, хәтер яҡшыра, был ванна бигерәк тә төрлө нервы сирле кешеләргә файҙалы. Тоҙло йылы ваннаны 10-15 минутлап аҙнаһына 2-3 тапҡыр инеп торорға.

### Гәрсис ваннаһы

Гәрсис (горчица) ваннаһы йә ҡулға, йә аяҡтарға ғына эшләнә, сөнки уның эфир майы көслө. Ик-өс ус ҡоро гәрсисте (яңы булһын) 50 градус йылы һыу менән төйөрсөктәрен ҡалдырмай иҙгәс кенә тәғәйенләнгән һыуға ҡушырға. Ҡайнар һыу менән иҙергә ярамай, эфир майҙары юҡҡа сыға. Ваннаны 5-10 минуттан артыҡ инмәҫкә һәм аҙаҡтан йылы һыу менән сайынырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




# ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Ата һәм әсә

● Атайығыҙ бер нәмә бирер булһа, үҙенең мәрхәмәттәре менән бирер. Шуның өсөн нимә булһа ла һорарға иткәндә, янында сит кеше булмаған ваҡытта, әҙәпле генә һорағыҙ. Әгәр теләгәнегеҙҙе бирмәһә, борсолмағыҙ. Сөнки һеҙгә нимә кәрәк һәм кәрәкмәгәнде, ниндәй әйбер ярағанды һәм ярамағанды ул яҡшыраҡ белә.

● Атайығыҙҙың яҡын дуҫы булһа ла, атайығыҙҙан башҡа кешенән һорау ғәйеп. Ул ғаилә хөрмәтен ебәрә. Шуның өсөн, нимә эшләргә теләһәгеҙ ҙә, атайығыҙҙан һорағыҙ.

● Бала саҡта аҡса тоторға өйрәнмәгән кеше олоғайғас та аҡса тота алмай. Ғүмер түгел, көн дә үткәрә алмай. Бәлки, бар байлығын исраф итеп, бәхетһеҙ булып ҡалыр. Шуның өсөн атайығыҙ тарафынан бирелгән аҡсаларҙы тота белергә өйрәнегеҙ. Һаҡ булығыҙ. "Был аҙ ғына аҡса", - тип уйламағыҙ, сөнки бөгөн һеҙгә аҙ аҡса кәрәк.

● Ҡайһы бер балалар шулай була. Атаһының малына ышанып, һис кәсеп һәм эш юлына кермәй. Ялҡаулыҡҡа ғәҙәтләнәләр. Ахырҙа бер көн килер, аҡсалары ла бөтөр, йәшәр өсөн ҡулда һөнәрҙәре лә булмаҫ. Шуның өсөн, ата малына ышанып тормай, ни ҡәҙәр бай балаһы булһағыҙ ҙа, фәҡир кешенең балаһы кеүек, һөнәр өйрәнеү өсөн тырышығыҙ.

● Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Ата-әсәгеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаҫ. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә сараларҙы алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ, серҙәрегеҙҙең хазиналары һәр ваҡыт уларҙың күңелендә булһын!

● Күҙгә күренгән һәр нәмәгә ҡыҙығыусы булмағыҙ. Әсәйегеҙ йыйып ҡуйған нәмәләр, ҡунаҡтар өсөн тип әҙерләнгән әйберҙәр янында йөрөмәгеҙ һәм зарар итмәгеҙ! Сөнки әсәйҙән рөхсәтһеҙ йәшерен эштәр эшләүсе балалар бындай эшкә ғәҙәтләнә. Һәм көндән-көн арттырып (Аллаһы Тәғәлә һаҡлаһын!) уғыры булып китеүҙәре мөмкин.

● Тәнегеҙ үҫеп, көс кергәс, ҡулығыҙҙан килгән эштәрҙә ата-әсәгеҙгә ярҙамсы булығыҙ. Улар ҡартайғас, уларға һис асыуланмағыҙ. Шәфҡәт һәм хеҙмәттәрегеҙҙе тағы ла арттырығыҙ, сөнки улар һеҙҙе бәләкәй булғанығыҙҙа, йәш ваҡытығыҙҙа, тәрбиәләп үҫтерҙе. Бер көн һеҙ ҙә атай булырһығыҙ, уйлап ҡарағыҙ, балаларығыҙ хөрмәтегеҙҙе һаҡламаһа, быға риза булырһығыҙмы? Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әфәндебеҙ хәҙрәттәре: "Аталарығыҙға изгелек итһәгеҙ, һеҙгә балаларығыҙ изгелек итер", - тип әйткән.

● Ҡайһы бер бала шулай була. Атаһының тәрбиәһендә, мәрхәмәттәре күләгәһендә рәхәт-рәхәт үҫә лә, үҫкәс, атаһының фекерҙәренә ҡаршы килә, һүҙҙәрен ишетмәй, уларҙың ғәмәлдәрен аҙ тип күлә.(Һеҙ шулай инсафһыҙ булмағыҙ). Атайығыҙ иһә һеҙҙең өсөн яуаплы булмай, бәлки улар өсөн һеҙ яуаплы буласаҡһығыҙ. Көн артынан көн үтеү менән, ғилемдәр алға барыу сәбәпле, бөгөнгө бөйөк ғалим иртәгә шәкерт дәрәжәһендә ҡалыуы тәбиғи.

● Ярамаған эш ҡушҡан ваҡытта һис тарһынмай һәм күңелде йәрәхәтләмәй, киреһенсә, әҙәпле, инсафлы итеп, эштең дөрөҫөн белдерергә тырышығыҙ.

**(Дауамы бар).**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# ӘЙҘӘ, КӘЛӘШ ДИМЛӘЙЕК!

## Өфөлә мосолмандар өсөн таныштырыу үҙәге асылды

**Башҡортостан диниә назараты ҡарамағында мосолмандар өсөн таныштырыу үҙәге асылды. Был үҙәктең эшмәкәрлеге, бурыстары хаҡында Диниә назаратының йәштәр бүлеге етәксеһе Айнур АРЫҪЛАНОВ һөйләй:**

### Ғаилә илдең дә, милләттең дә нигеҙе

Республикабыҙҙа Ислам динен ҡабул иткән йәштәр бихисап, һуңғы йылдарҙа уларҙың һаны тағы ла артты. Шуға ла Ислам дине яңы үҫешеп килгән дәүләттә бындай Үҙәк төҙөлөүе бик әһәмиәтле, сөнки мосолмандарға клубтарға, дискотекаларға йөрөү харам һаналыу сәбәпле, уларға рөхсәт ителгән танышыу, аралашыу урыны булырға тейеш. Ислам ҡағиҙәләрен үтәп йәшәүсе мосолман икенсе яртыһының да мотлаҡ үҙенең фекерҙәше булыуын теләй бит.

Беҙ таныштырыу үҙәгенә егет-ҡыҙҙарҙы саҡырып, төрлө темаларға әңгәмәләр уҙғарабыҙ. Ошо әңгәмә барышында улар таныша, фекер алыша. Һөйләшеү аҙағынан сәй эсеүҙәр ойошторола. Беҙҙең төп бурыс - таныштырыу. Йәштәр артабан осрашыу, аралашыуҙы үҙҙәре хәл итә.

Үҙәкте тик егет-ҡыҙҙарҙы таныштырыу урыны, тип кенә аңларға ярамай, шулай уҡ уның төп бурысы - мосолмандар араһында ҡәрҙәшлекептәрен нығытыу. Бында мосолман йәштәре бер-береһе менән танышып, аралашыу даирәһен киңәйтә. Бер ятаҡта йәшәп, бер-береһенең мосолман икәнен белмәгән, беҙгә килеп күрешкән студенттар ҙа булды.



Ғаилә милләттең асыл тәбиғәтен, мәҙәниәтен, көс-ҡеүәтен һаҡлап тора. Милләт һау, сәләмәт булһын өсөн, иң тәү сиратта ғаиләләр матур, сәләмәт, ныҡлы булырға тейеш. Ғаилә ҡороу егет менән ҡыҙҙан ҙур яуаплылыҡ талап итә. Милләтебеҙ йәштәре араһында өйләнмәй, буйҙаҡ йөрөүселәрҙең күп булыуы аяныслы хәл. Минеңсә, был күренештең сәбәптәре - уларҙың Ислам ҡағиҙәләрен тулыһынса үтәмәүендә. Дин тотоусы егет-ҡыҙҙар ғаилә ҡороуға ыңғай ҡарай, ә дини ҡағиҙәләрҙе үтәмәгән йәштәрҙең күбеһе никах уҡытырға ашығып бармай, улар шикләнә, ҡурҡа, никахһыҙ ҙа йәшәп була, тип уйлап яңылыша.

Шәриғәт ҡанундарын боҙмайынса яңы ғаиләләр төҙөү -сауаплы эш. Бәйғәмбәребеҙ (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Никах, ғаилә ҡороу, йәштәрҙе никах менән өйләндереү, тормошландырыу - ул минең сөннәтем", тип әйткән. "Кем минең сөннәтемдән ситкә китә, шул минең өммәтемдән түгел", тиелә икенсе бер хәҙисендә.

Үҙәк төҙөлгәнгә тиклем дә мосолман егеттәрен һәм ҡыҙҙарын таныштырыу эшен алып бара инем. Әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә йәштәрҙең яҙмышын хәл итеү ҙур яуаплылыҡ талап итә. Әммә барыһы ла Бөйөк Аллаһы Тәғәлә ҡулында, ә мин егет һәм ҡыҙҙарҙы таныштырыуҙа сәбәп кенә булып торам. Ниндәйҙер эшкә сәбәп ҡылыу мөһимдер, ә һөҙөмтәһен Аллаһы Тәғәлә бирер. Беҙ был эшебеҙҙе Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн ихлас күңелдән башҡарабыҙ һәм бының өсөн бер ниндәй маҡтау һүҙҙәре лә, бүләк тә көтмәйбеҙ.

### Иртәрәк өйләнешеү - хәйерлелер

Ислам дине буйынса йәштәрҙе мөмкин тиклем иртәрәк өйләндереү хәйерле һанала. "Өммәтемдең иң насары - өйләнмәгән егеттәр һәм кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар", тиелә хәҙистә. Ил, милләт сәләмәтлеге - йәштәр ҡу-

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…*

**Яусылар мәктәбен тергеҙеү… бөгөнгө замандың афәтенә әйләнеп барған буйҙаҡлыҡтан ҡотҡарырмы?**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ:** Мосолмандарҙың таныштырыу үҙәген булдырыуға ике төрлө ҡараштамын. Димләү, таныштырыу борон-борондан килгән. Әлбиттә, буйҙаҡлыҡты бөтөрөү буйынса эш ҡуҙғатмай ултырғансы, нимәлер эшләү, сәбәп ҡылыу кәрәк. Мосолмандарҙың таныштырыу үҙәге барлыҡҡа килеп, маҡсаттарын тормошҡа ашыра ала икән - яҡшы. Һәр кемебеҙҙең үҙ яҙмышы, үҙ яртыһы бар. Буласаҡ тормош иптәшенде лә Аллаһы Тәғәлә алдыңа үҙе килтереп сығара. Әммә, дин милләтте айырмай, тип, беҙ был үҙәктә мосолман тигән маҡсаттан сығып эш итһәк, хата яһаясаҡбыҙ. Беҙ интернациональ ғаиләләр төҙөгән совет осорон үттек инде. Шуға ла димселек ойошмаһы бер үк милләт йәштәрен ҡауыштырыу мәсьәләһен ҡарарға тейештер, тип уйлайым. Сөнки, статистика буйынса ҡарағанда, бер милләттә милләт-ара никахтар 10 проценттан арта икән, ул милләт бөтөүгә табан бара, тигән һүҙ. Ә беҙҙең милләттә бөгөнгө көндә милләт-ара никахтар 20 процент тәшкил итә. Әгәр ҙә димселек институты дини нигеҙҙә ҡоролоп, шул мәсьәләгә иғтибар итмәһә, дөрөҫ булмаҫ. Мин башҡорт, татар ҡыҙҙарының кавказ егеттәренә кейәүгә сығып, ниндәй ҙур ыҙалыҡ менән йәшәгәндәрен, сит илдән ҡайта алмай зар-интизар булғандарын беләм. Улар, берүк ҡыҙҙар үҙ милләтенә сыҡһын, тип кәңәш бирә. Милләт-ара никахтарҙың нисбәте һаҡланһын, тиһәк, үҙәк эсендә мосолман тигән принцип менән бергә, бер үк милләт кешеләрен ҡауыштырыуҙы ла ойошторһаҡ, яҡшыраҡ булыр ине. Димселәр һәр бер таныштырған егет менән ҡыҙҙың шәжәрәһен, ырыу-затын, затынан кемдәр сыҡҡанын белергә тейеш. Өҫтән-мөҫтән генә мәғлүмәткә эйә булыу ҙа дөрөҫ түгел.

Ҡыҙҙар бер ваҡытта ла ятраҡан кешеһенә, мин һине яратам, өйләнешәйек, тип әйтә алмай. Шул уҡ ваҡытта өйләнергә уйлап, ҡыҙҙар янына барып, үҙенең тойғоһон белдерергә оялып йөрөгән егеттәр ҙә бар. Шуларҙы иҫәпкә алғанда, был үҙәк, һис һүҙһеҙ, кәрәк. Шул уҡ ваҡытта яҙмышыңды бөтөнләй икенсе яҡта осратыуың мөмкин. Ҡала мегаполисындағы димселек үҙәгендә аралашыу механизмы тәрән уйланылған булырға тейеш. Димләү юлында кешенең яҙмышын боҙоп ҡуймайыҡ, тим.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бигерәк тә һуңғы йылдарҙа өйләнмәй йәки кейәүгә сыҡмай йөрөгән милләттәштәребеҙ үтә күбәйеп китте. Улар араһында бөтөнләй ғаилә ҡорорға теләмәгәндәр юҡ кимәлдә. Һәр кем матур ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә, һөйөп-һөйөлөп йәшәргә теләй. Тимәк, быға ниндәйҙер сәбәптәр ҡамасаулай. Психологик сәбәптәр ҙә бар. Ҡайһы берәүҙәр үтә оялсан, баҙнатһыҙ, йә булмаһа, үҙен үтә түбән баһалай. Улар, мин бер кемгә лә кәрәк түгел, тип уйлай. Ә димсе, һылап-һыйпап, кешенең күңелен күтәреп ебәрә, ниндәйҙер ышаныс-өмөт уята. Үҙенең һүҙҙәре менән һинең баһаңды күтәреп ебәрә. Шул уҡ ваҡытта борон бер кем менән дә танышмаған, йөрөмәгән кешеләрҙе лә димләп, яусылап, ғаилә ҡорорға юл асҡандар. Бәлки, бөгөнгө көндә лә шундай ысулды ҡулланып ҡарарға кәрәктер. Хәҙерге заманда бер-береһен бөтөнләй белмәгән-күрмәгән кеше шунда уҡ ғаилә ҡорорға теләк белдереп бармаҫ, әлбиттә. Димселәр, яусылар төрлө алымдар менән бер-береһенә тура килгән

лындалыр. Йәштәребеҙ өйләнешеп, күркәм ғаиләләр ҡорһа, сәләмәт балалар үҫтерһә, милләтебеҙҙең киләсәге лә өмөтлө булыр.

Ислам дине - күркәм диндер. Был дин буйынса яҡшылыҡ менән мөғәмәлә итеү, бер-беренә сабыр, итәғәтле булыу кәрәк. Һуңғы йылдарҙа яңы ғына ғаилә ҡорған йәштәрҙең ваҡ сәбәптәр арҡаһында тиҙ генә айырылышыуы күҙәтелә. Ә Исламда ғаилә иң беренсе урында тора. Өйләнешеү йәштәр, шулай уҡ ике яҡтан туғандар үҙ-ара килешелгәс кенә башҡарыла. Күптәр, Исламда көсләп өйләндереү рөхсәт ителә, тигән хата ҡараштә. Исламда көсләү, мәжбүр итеү юҡ, һәр эш кешенең теләге, үҙ ихтыяры менән башҡарыла. Мосолман ғаиләләре һәр яҡтан өлгө булып тора. Уларҙың йорттарынан иман нуры, йылылыҡ ағыла, бер-береһен аңлап, яратып, хөрмәт итеп йәшәйҙәр. Насар ғәҙәттәр булмағанға күрә, сабыйҙар ҙа һау-сәләмәт булып үҫә.

Беҙгә мөрәжәғәт итеүселәр төрлө йәштә, уларҙың күбеһен егеттәр тәшкил итә. Элек был бурысты махсус димселәр, өләсәйҙәр, йәштәрҙең туғандары атҡарһа, хәҙер был йолалар бер аҙ онотолдо. Шуныһы үкенесле, танышырға теләктәре булһа ла ҡыҙҙарыбыҙ оялсанлыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ күрһәтә. Егеттәргә мосолман ҡыҙҙарын табыуы ауыр, сөнки улар урам буйында йөрөмәй. Бигерәк тә башҡорт мосолман ҡатын-ҡыҙҙары бик тыйнаҡ, оялсан, ғорур. Башҡа милләт ҡыҙҙары кеүек, беҙҙең ҡыҙҙар менән енел генә танышып китермен, тип уйлама ла. Шуға күрә, ҡыҙҙарға ҡыйыурак булығыҙ, оялмағыҙ, был эштең һис кенә лә гонаһы юҡ, тип әйтер инем.

Әлеге көндә таныштырыу үҙәге әүҙем генә эшләп килә, беҙҙең аша аралашыусылар, танышыусылар, хатта ҡауышыусылар бар. Артабанғы дауамы хәйерле булһын.

**Әйткәндәй...**

**Мосолман ғаиләләре һаны артыуы ҡыуаныслы күренеш. Әгәр ҙә районда, ауылдарҙа йәшәгән мосолман ҡәрҙәштәребеҙ икенсе яртыһын табырға теләһә, шулай уҡ беҙгә мөрәжәғәт итә ала. Иншалла, бәлки, һеҙ бәхетегеҙҙе нәҡ бында табырһығыҙ. Һеҙҙең таныштырыу үҙәгенә килеп, анкета тултырыуығыҙ кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ телефон номерҙары аша ла таныштырыу осраҡтары бар. Аллаһы Тәғәләгә тапшырып, башҡарған эшебеҙҙең һөҙөмтәләре яҡшы булһын, тип теләйек.**

**Танышырға теләүселәр түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итә ала: Өфө ҡалаһы, Чернышев урамы, 103. Тел: (347) 272-70-34.**

кешеләрҙе осраштырыу өсөн кәрәктер. Буйҙаҡтарға шундай юл менән ярҙам итеп булалыр. Улар араһында бәйләнеш булдырырға, аралашыу даирәһен киңәйтергә кәрәк.

**Гөлназ ХӘСӘНОВА, студент:** Мин күптән инде Ислам динендә. Аралашҡан дуҫтарым да намаҙ уҡыусы, ураҙа тотоусы мосолман ҡыҙҙары. Дин тотмаған йәштәр төрлө клубтарҙа, кискеһен урамдарҙа йөрөй, ә бындай күңел асыуҙар Ислам дине ҡанундары буйынса тыйыла. Беҙ көндөҙҙәрен парктарҙа йөрөйбөҙ, концерт, спектаклдәргә барабыҙ, әммә ошо ваҡыт эсендә кемделер осратып, тынышыуың икеле. Мосолмандарҙың таныштырыу үҙәге булдырылыуы беҙҙең өсөн ҡыуаныслы хәл. Аралашыу даирәбеҙ киңәйер, мосолмандар араһында ҡәрҙәшлек ептәре нығыныр. Димләп таныштырыуға ризамын, шул уҡ ваҡытта үҙемдең шәхси шарттарым да бар. Мәҫәлән, минең икенсе яртым мотлаҡ Ислам ҡанундарын үтәгән рухлы башҡорт егете булырға тейеш. Бәлки, кемдәрҙер, дин буйынса милләт айырырға кәрәкмәй, тиер. Әммә, минең уйымса, был төп һәм мөһим шарттарҙың береһе. Таныштырыу араһында таныштырыу юлы менән ғаилә ҡороусылар бар, улар шул тиклем бер-береһенә тап килеп тора, үҙҙәрен бәхетле һанайҙар.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*КИТАБЕННАС*

# ТАҒЫ "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ТУРАҺЫНДА

## Боронғо башҡорттар логика, математика һәм астрономия өлкәһендә ниҙәр белгән?




**Башҡорт халҡының килеп сығышы һәм тарихы, боронғо башҡорт ғилеме проблемалары буйынса яҙылған фәлсәфәүи хеҙмәттәре менән Башҡортостан зыялылары араһында киң танылыу тапҡан ватандашыбыҙ Салауат Ғәлләмовтың "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан яңы китабы "Башҡорт философияһы. Логика. Математика. Астрономия" тип атала. Был хеҙмәт тынғыһыҙ ғалимдың "Башҡорт философияһы нигеҙҙәре" серияһында нәшер ителгән бишенсе китабы. Башҡорт халҡының милли космогоник мифы булған "Урал батыр" эпосын математик анализ күҙлегенән ҡарап, эпос геройҙарының диалогтарын тикшереп, автор боронғо башҡорт логикаһының төҙөлөшө һәм йөкмәткеһе хаҡында ҡыҙыҡлы асыштар яһауға өлгәшкән. Космогоник мифтарҙа халыҡтарҙың календарь циклы сағылыш табыуы тураһындағы фәнни тезисты ҡулланып, Салауат Ғәлләмов Арҡайым эпохаһы башҡорттарының астрономик ҡараштарын асыҡлауға өлгәшә. Уның фекеренсә, боронғо башҡорт астрономияһы йондоҙҙар хаҡындағы бөтә һинд-герман фәненә нигеҙ булып, уны боронғо һинд һәм грек астрономик мифтарының тәү сығанағы сифатында ҡарап була. Уҡыусыларыбыҙ ошо ҡыҙыҡлы һәм фәһемле китапты табып уҡырҙар, тип ышанып, һүҙҙе Салауат ҒӘЛЛӘМОВТЫҢ үҙенә бирәйек:**

- Логика һәм математика кеүек абстракт фәндәрҙең барлыҡҡа килеүен һәм артабанғы тарихи үҫешен өйрәнеү философия фәнендә иң ҡатмарлы проблемаларҙың береһе булып тора. Мин ошо проблеманы боронғо башҡорт космогоник мифы булған "Урал батыр" эпосы миҫалында асыҡлауҙы фәнни тикшеренеүҙәремдең маҡсаты итеп ҡуйҙым, һәм әле һүҙ барған китабымды ошо хеҙмәтемдең яҙма һығымтаһы итеп ҡарарға кәрәк.

XX быуат аҙағында Көньяҡ Уралда археологтар Б. Г. Зданович һәм В. Ф. Генинг тарафынан боронғо арийҙарҙың Арҡайым ҡаласыҙы, Һынташты монументаль ҡәберлеге табылыуы, һуңынанырак археолог А. Пшеничнюк тапҡан сармат алтын боландары коллекцияһы тарихи Башҡортостан территорияһында меңәр йылдар дауамында ведик Куру һинд-арийҙарының - хәҙерге башҡорттарҙың һәм Месопотамия курдтарының алыҫ ата-бабаларының һинд-иран цивилизацияһы йәшәүен бөтә донъяға белдерҙе.

Цивилизация уны тәшкил иткән халыҡтарҙың мәҙәниәтлелеккә өлгәшеп, логика, математика (геометрия) һәм астрономия кеүек фән өлкәләрендә билдәле бер белемгә эйә булыуын белдерә. Арҡайымды төйәк итеүсе боронғо Куру ведик арийҙарына билдәле булған был белемдәр башҡорттоң "Урал батыр" мифында сағылыш табып, беҙҙең көндәргә килеп еткән.

Ошо хәҡиҡәттең асылын аңлатып китеү урынлы булыр. Математиканың нигеҙе булған логик фекерләү һәм абстракт төшөнсәләр кешегә тәбиғи рәүештә бирелмәй. Әммә абстракт белеме булмаған боронғо кешенең фекерләй алыуы уға интуитив (һиҙемләү аша) рәүештә тәбиғәт күренештәре ҡанундарын - йыл миҙгелдәренең билдәле тәртиптә әҙмәәҙлекле алмашыныуын, көн һәм төн сиратлашыуын һәм башҡа ошондай сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен асыҡлай алыу мөмкинлеген биргән. Ташбаҡыр быуаттары дәүерендә телендә дөйөм төшөнсәләрҙе белдереү өсөн етерлек лексик саралары булмаған боронғо кеше дөйөмлөктө айырым, абстрактлыҡты аныҡ, физик тойоп була торған төшөнсәләрҙә сағылдырған. Тап шуның өсөн "Урал батыр" мифында Ер шарының үҙ күсәре тирәһендә әйләнеүе һәм Ҡояш системаһының төҙөлөшө хаҡындағы абстракт-математик тәғлимәт мифик геройҙар эшмәкәрлеген художестволы хикәйәләү формаһында бирелгән.

Башҡорт мифын антик философтар һәм башҡа фекер эйәләренең текстары менән сағыштырып, анализ биргән хәлдә, Арҡайымдың боронғо кешеләренең логика, математика һәм астрономия буйынса белем торошо хаҡында дөйөм һығымтаға килеү ауыр түгел һымаҡ тойола. Әммә оҙаҡ йылдар буйы ғалимдарыбыҙҙан бер кем дә ошо бигүк еңел булмаған эшкә тотонорға баҙнат итмәне.

Рәсәй фәне яҙмышы тураһында уйланған саҡта мине бер фекер биләп ала: һуңғы йылдарҙа В. Иванов, А. Ф. Лосев, О. С. Булгаков, О. М. Фрейденберг, Н. О. Лосский, О. П. Флоренский, С. Л. Франк кеүек фекер эйәләренең элек тыйылған ғилми хеҙмәттәрен нәшер итеүҙән ниндәй фәтеүә булды икән, әгәр үҙҙәрен уларҙың уҡыусылары һәм эйәрсәндәре итеп белдереүселәр ошо ғалимдарҙың теоретик белемдәрен ғәмәлдә ҡуллана алыуға һәләтһеҙ булып сыҡҡас? Быны аңлар өсөн Владимир Соловьевтың, Федор Достоевскийҙың, Павел Флоренскийҙың, Алексей Лосевтың һәм башҡа ошондай фекер эйәләренең ниндәй рухи һәм физик һынауҙарға дусар булыуын иҫкә төшөрөү ҙә етәлер.

А. Ф. Лосевтың диалектик ысулын һәм Эрнст Кассирерҙың символик формалар тәғлимәтен ҡулланыу аша "Урал батыр" мифын махсус тикшереү минә боронғо башҡорт философияһын бөтә донъяға сығарыу мөмкинлеген бирҙе, һәм был ғилми даирәгә һинд-герман философияһының Көнсығыш (һинд-арий) һәм Көнбайыш (эллин) тармаҡтарының б.э. тиклем II мең йыллыҡ сиктәрендә төньяҡ географик (гиперборей) сығышлы булыуын күрһәтте.

Башҡорт мифын ошо рәүешле тикшереүгә шумерологияға нигеҙ һалыусы Генри Роулинсондың (1810-1895) Месопотамия халыҡтарының бынан 4 мең йыл элек уҡ үҙҙәренең йыл иҫәбен боронғо шумер календары циклына ярашлы алып барғанлығы Гилгәмеш тураһындағы хикәйәттең 12 таҡтасыһында сағылыш табыуы хаҡындағы ғәжәйеп дөрөҫ фаразы йүнәлеш бирҙе. Астрономия һәм календарь булыуы артабан математиканың барлыҡҡа килеүен һәм үҫешен билдәләй. "Урал батыр" мифында Гилгәмеш тураһындағы курд-шумер хикәйәтенең 6 таҡтасыһында булған мәғлүмәттең һаҡланып ҡалыуы ошо ике әҙәби ҡомартҡыны сағыштырыу аша Арҡайым дәүерендә (б.э. тиклем II мең йыллыҡ) йәшәгән боронғо башҡорттарҙың астрономияһын, логикаһын һәм математикаһын тулыһынса тергеҙә алыу мөмкинлеген бирҙе. Тап шуның өсөн мин, боронғо башҡорттарҙың Уралда йәшәгән хәҙерге вариҫы, бер быуат үтеүгә инглиз ғалимы, сэр Генри Роулинсон һүҙҙәренең хаҡлығын раҫлай алыуым менән ғорурланам.

Йәнә, боронғо башҡорт астрономияһы, алгебраһы, геометрияһы, логикаһы буйынса хатта иң ябай мәҡәләләрҙең дә булмауы ошо китаптың донъя күреүенә сәбәп булып, бәлки, күренекле математик-механик, академик Борис Раушенбахтың (1915-2002) еңел ҡулы артынса, гуманитар фәндәр өлкәһендә математик анализ ысулын ҡуллана башлауға булышлыҡ итер.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

***✓ Рәсәйгә ҡушылғандан алып 450 йыл эсендә башҡорттар 200-ҙән ашыу тапҡыр ихтилалға күтәрелгән. Был нимәне күрһәтә һуң? Беҙ бөгөн маҡтаған дуҫлыҡ ошомо, әллә, киреһенсәме? Тимәк, ирекkә ынтылыу башҡортҡа хас сифаттарҙың береһе.***

# САРДАР ФАРМАН

## йәки Башҡорт

**Ниндәйҙер тормош ауырлығы, ҡатмарлы ситуациялар алдында баҙап ҡалғанда, үҙебеҙҙең ни өсөн бындай ваҡиғаларға әҙер булмауыбыҙ тураһында уйланабыҙ һәм күп кенә һорауыбыҙ яуапһыҙ ҡала. "Минең маҡсат-ниәтем изге, яҡты ине, ә ни өсөн мине аңламанылар, һанламанылар һуң?" - тип тә борсолабыҙ. Ысынлап та, ни өсөн шулай һуң? Ошо урында менталитет тигән төшөнсә иҫкә килеп төшә. Ә, ғөмүмән, нимә һуң ул менталитет? Башҡорт менталитеты ниндәй һыҙаттарға эйә? Ни өсөн дөйөм кешелек өсөн ыңғай һыҙаттарыбыҙ үҙебеҙгә ҡаршы була? Менталитетты, характерҙы үҙгәртеп буламы? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр тураһында психология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Вадим САФИН менән билдәле яҙыусы Ғәлим ХИСАМОВ әңгәмәләшә.**

**▶ Тәбиғи ерлек йәһәтенән, тарихи фактор булараҡ, башҡорт менталитетына ниндәй аңлатма бирергә булыр ине? Ул халыҡ, милләт барлыҡҡа килгән мәлдән алып ниндәй үҙгәрештәр кисергән? Ниндәй сифаттарыбыҙҙы һаҡлай алғанбыҙ, ниндәй яңы сифаттар барлыҡҡа килгән?**

**В. САФИН:** Менталитет тигән һүҙҙең мәғәнәһен нисек аңлайбыҙ һуң? Менталитет - ул үҙеңдең булмышыңды үҙ-үҙеңә презентациялау, раҫлау, милләт исеменән үҙеңде донъяға күрһәтеү һәм иҫбат итеү, үҙең аша тарихыңды, тәбиғи асылыңды, донъяға ҡарашыңды белдереү, таныттырыу. Үҙеңде-үҙең аңламаһаң, тәбиғәтеңде тоймаһаң, тарихыңды белмәһәң, үҙең аша үткәрмәһәң, шәхес булараҡ үҫешә алмайһың, йәғни милли менталитеты булмаған кеше шәхес түгел, ул үҙ-үҙен ҡороуға, шәхесен ойоштороуға һәләтһеҙ. Ошоларҙы аңлағандан һуң ғына кешенең характерын аңлатып була.

Һәр бер милләт үҙендә ыңғай сифаттар табып, үҙ-үҙен раҫлай. Ундай сифаттарҙы табыр өсөн һәр милләт үҙе менән сағыштырыу өсөн икенсе милләттең кире һыҙаттарын эҙләй башлай, шулай үҙенең өҫтөнлөгөн билдәләргә тырыша. Минең ҡартатай типтәр өләсәйемә телендәге "сығыҙмы" тигән ялғауға төрттөрөп: "Сыуашҡа оҡшап ни...", - тип әйтә торғайны. Өләсәйем ҡартатайыма: "Ә һин мәрдәүгә (мордваға) оҡшағанһың", - тип яуап бирә торғайны. Шуның кеүек, үҙен күтәрергә теләгән милләт үҙенә яҡын торған милләттең кире яғын эҙләүсән, һәм был хәл тәбиғи.

Аңыбыҙҙа бөтөнлөгөбөҙҙө һаҡлар, үҙебеҙҙе иҫбат итер өсөн беҙ бөтәһен дә, хатта һөйләштәге диалект үҙенсәлектәренә тиклем ҡулланабыҙ. Ошоларҙан сығып, башҡортҡа ниндәй һыҙаттар хас булыуын билдәләп ҡарайыҡ. Барлығы 60 һыҙат таптым. Ҡайһы бер рус ғалимдары беҙҙе ҡунаҡсыл һәм ғорур итеп күрә. Әммә ҡунаҡсыллыҡ һәм ғорурлыҡ күп халыҡтарға хас сифаттар. Грузиндар: "Беҙҙән дә ҡунаҡсыл кеше юҡ", - ти. Бәлки, дөрөҫтөр ҙә, йәғни ҡунаҡсыллыҡ тик беҙгә генә хас сифат түгел. Ғорурлыҡҡа килгәндә, чечендарҙан да ғорурыраҡ халыҡ бармы икән, сөнки улар Рәсәйҙә күп ҡан түгеп, үҙенең донъяла барлығын иҫбат иткән берҙән-бер халыҡ. Беҙҙең халыҡта ла бар ғорурлыҡ, әммә уның асылы, сифаты икенсе төрлөрәк.

Башҡорттарҙың үҙҙәренә генә хас булған һыҙаттарҙы билдәләр өсөн бик күп тарихи китап уҡыным, бик күп кеше менән аралаштым. Һуңғы биш көн эсендә ҡайҙа ғына барһам да, һәр кешенең был хаҡтағы фекерҙәрен тыңлап, үҙемдең күҙәтеүҙәрем менән сағыштырып, дөйөмләштереп, 60 сифат араһынан шундай һыҙаттарҙы ҡалдырҙым:

**1. Һәлмәклек**, йәғни ашыҡмау, һәүетемсә булыу. "Бер аяғыңды күтәргәнсе, икенсеһен эт ашаған", - тиҙәр.

**2.Ябайлыҡ**, йәғни тәбиғилек, үҙ-үҙең булып ҡалыу. "Ябайлыҡ бурлыҡтан да насарыраҡ", - ти урыҫтар.

**3.Күндәмлек**, йәғни яҙмышыңа риза булыу. "Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты һыйпап ташлап булмай ҡул менән", - тип әйтелә халыҡ йырында.

**4.Баһымсаҡлыҡ**, йәғни күндәмлектең дауам ителеше. "Йөк һөйрәгән атты ғына уртаға егәләр", - тиҙәр.



**▶ Моңон һаҡлаған милләтте бер ниндәй сәйәсәт тә, бер ниндәй көс тә юҡ итә алмай. Моң - башҡортто һаҡлаусы цемент, үҙәк. Башҡорттоң төп һыҙаты - моңонда.**

**5.Моңлолоҡ**. Моң - башҡорт милләтенең әсәһе. Сөнки донъяға ҡарашын, уны танып-белеүен башҡорт моң аша биргән. Мондоң мәғәнәһе шул тиклем тәрән, бында башҡорттоң тарихы, көнкүреше, йәғни уның йәшәйешенә бәйле һәр нәмә моңона һалынған да ҡуйған. Бик отошло был, сөнки һүҙҙәренә бәйләнеп булған хәлдә лә, моңға бәйләнеп, уны юҡ итеп тә, уға дәғүә белдереп тә булмай. Моңда башҡорттоң фиғеле, булмышы кодҡа һалынған, сөнки быны тик башҡорт рухлы кеше генә аңлай һәм аңлата ала. Моң - һөйләшеү-аралашыуҙың иң нескә, иң тәрән, иң борондан килгән формаһы. Шуға күрә башҡорт үҙенең башҡортлоғон моңо аша белә, аралаша, үҫә. Моңон һаҡлаған милләтте бер ниндәй сәйәсәт тә, бер ниндәй көс тә юҡ итә алмай. Моң - башҡортто һаҡлаусы цемент, үҙәк. Башҡорттоң төп һыҙаты - моңонда. Шуға күрә уны берәү ҙә үҙгәртә алмай, тартып ала алмай. Моң - милләттең йәне ул.

**6.Ышаныусанлыҡ**, ул шулай уҡ ябайлыҡҡа бәйле. Ышаныусанлыҡҡа үпкәселлек бәйле.

**7.Йыуашлыҡ**, күндәмлектең игеҙәге, уның йөкмәткеһе. Әммә "Йыуаштан йыуан сыға", тигән мәҡәл дә бар.

**8.Түҙемлелек**. Түҙемлелек бар халыҡта ла бар, әммә башҡорт күндәм һәм һәлмәк булғас, уның түҙемлегеге үҙенсә. "Түҙгәнгә - түш", - тип әйтәләр халыҡта. Шулай ҙа башҡорт түҙемлелегенең аҙағы һәр саҡта ла яҡшы тамамланмай. Сөнки һәр бер түҙемлелек тә сабырлыҡ була алмай. Башҡорттоң күтәреп һуғыу, ишекте шарт ябып сығып китеү кеүек ғәҙәттәрен ошоноң менән аңлатып була. Минең менән Зыяф һәм Ҡасим тигән егеттәр уҡыны. Шым ғына инеләр, әммә оҙаҡ зиттарына тейһәң, "шартлай ҙа" белә инеләр. Береһе ҡайҙандыр сит илдән ҡатынына күҙҙең яуын алырлыҡ сынаяҡ сервизы алып ҡайтҡан. Ҡатыны сынаяҡтарҙың етешһеҙ яҡтарын һанарға тотонған: "Бына аҫ яғы шулай булһа икән, өҫ яғы былай булһа икән, биҙәге былайыраҡ булһа ине, тотҡаһы тегеләйерәк булһа ине. Ана, күрше ҡатындың ире алып ҡайтҡан сынаяҡтар беҙҙекенә ҡарағанда күпкә матурыраҡ, фәлән-фәсмәтен..." Бер сәғәт түҙгән был, түҙгән түҙгән дә, яңы сервизды ҡулына алып, иҙәнгә селпәрәмә килтерә һуҡҡан. Өйҙәрендә стакандар ғына ҡалған, шуның менән сәй эскәндәр. Бер айҙан һуң тағы ла ҡайҙалыр барған да был, ҡом көршәктәр алып ҡайтҡан. Ҡайтһа, ауыҙы бешкән ҡатыны: "Эй, матурҙар үҙҙәре, иҙәнгә төшһә лә ватылмай, ел өрһә лә урынынан ҡуҙғалмай, ныҡ ултыралар", - тип, теге көршәктәрен эй маҡтай икән ти.

**9.Үпкәселлек**. Был һыҙат алдағы һыҙаттарға ныҡ бәйле. Башҡорт ни өсөн тиҙ үпкәләп бара? Сөнки ул күндәмлеге, һәлмәклеге, баһымсаҡлығы, йыуашлығы, түҙемлелеге һәм ябайлығы арҡаһында тиҙ генә ышана ла, аҙаҡтан алданғанын белгәс, үпкәләй башлай. Бер ҡатын өйөндә бер әхирәте менән сәй эсеп бөткән генә икән, икенсе бер әхирәте килеп ингән, ти. Хужабикә тәүҙә килгән ҡунағын оҙатҡан да, самауырын яңыртып, яңы килгән әхирәтен табынға саҡырғас, быныһы: "Мин кеше ҡалдығын ашамайым, мин бит һин килгәндә өр-яңынан аш-һыу әҙерләп, һине һыйлайым", - тип, үпкәһен белдергән, ти. Шулай итеп, был осраҡта ябайлыҡ та үпкәләшеүгә алып килгән.

Был һыҙаттарҙың күбеһен бер үк ваҡытта ыңғай яҡтан да, кире яҡтан да ҡарап була. Ошо һыҙаттар милләтте һаҡлай, шул уҡ ваҡытта башҡалар беҙҙең ошо һыҙаттарыбыҙҙы файҙаланып, үҙ эшен эшләй.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Был һыҙаттар беҙҙең халыҡтың һәр кешеһенә лә хас. Улар һәр кешегә хас булмаһа, милләт һыҙаты ла була алмаҫ ине. Шул уҡ ваҡытта айырым ғына кешегә хас булған һыҙат милләттеке була алмай.

Милли менталитет ҡайҙан барлыҡҡа килә һәм нисек формалаша һуң? Беҙ бында тарихҡа мөрәжәғәт итмәйенсә булдыра алмайбыҙ, әлбиттә. Рәсәйгә ҡушылғандан алып 450 йыл эсендә башҡорттар 200-ҙән ашыу тапҡыр ихтилалға күтәрелгән. Был нимәне күрһәтә һуң? Беҙ бөгөн маҡтаған дуҫлыҡ ошомо, әллә, киреһенсәме? Тимәк, ирекkә ынтылыу башҡортҡа хас сифаттарҙың береһе.

Әле һеҙ һанап үткән һыҙаттар бер генә көн, бер генә йыл йә быуат эсендә барлыҡҡа килгән һыҙаттар түгел. Улар меңәр йылдар дауамында формалашҡан. Мин был турала "Киске Өфө"лә сығыш яһағайным инде: ғалимдар "Башҡорт" һүҙенең килеп сығышының 122 фаразын килтерә. 123-сөһө - минеке. "Башҡорт" һүҙе өс өлөштән тора. 1-сеһе - "баш", икенсеһе - "ҡор", өсөнсөһө - "т". "Ҡор" һәм "ҡорт" тигәнде башҡа ғалимдар ҡорҙо ( йыйын), бүрене һәм бал ҡортон аңлата тип фаразлай. Минеңсә, "ҡор" - ҡоралл кешене, "т" элементы күплекте аңлата. Тимәк, "ҡорт" ҡораллы күп кешене йәғни ғәскәрҙе белдерә. "Баш" өлөшө боронғо иран телендә "яҡшы" тигәнде аңлата. Ә инде "яҡшы ғәскәр" хәрби терминға күсергәндә "гвардия" тигәнде аңлата булыр. Арҡайым дәүерендә Урал буйында һәм уға терәлеп ятҡан далала иран телендә һөйләшкән йәмғиәтте тәшкил иткән халыҡ башҡорт тип аталған да инде. Ул ханға, вәлиәттә ҡағанға хеҙмәт иткән. Ул саҡта был төбәктә 28 ҡала булған. Ҡыҙыҡ һан, француздарға ҡаршы яуға ла 28 полк барған.

Минең фаразым хәрбилеккә барып тоташа. Башҡорт менталитеты барлыҡҡа килеүе лә тарихи фактор. Ул йылдар, быуаттар, мең йыллыҡтар буйына формалашҡан һәм менталитетыбыҙ нигеҙендә лә шул ух хәрбилек ята. Ни өсөн тигәндә, "башҡорт" һүҙенең "баш бүре" нән килеп сыҡҡан, тигән вариантты алһаҡ, Вадим Фәтхи улы, һеҙ һанаған һыҙаттарҙы аңлатып буламы? Булмай. "Бал ҡорто" йә "ҡор, йыйын" фаразынан сығып та аңлатыу мөмкин түгел. Йә булмаһа, Жәлил Кейекбаевтың "биш ырыу" фаразы ла башҡортҡа хас булған һыҙаттарҙың барлыҡҡа килеүенә нигеҙ була алмай.

Ә бына беҙ башҡортто хәрби кеше булараҡ, гвардия тип алһаҡ, ошо һыҙаттарҙың барыһын да аңлата алабыҙ. Әйтәйек, һәлмәклек һыҙаты. Хәрби кешенең һәлмәк булмайынса хәле юҡ. Ни өсөн тигәндә, сардарҙың бойороғо булмайынса тороп, ул үҙ белдеге менән бер эшкә лә тотона алмай. Оран яңғырау менән ул ҡулына ҡорал ала ла, алға саба. Ышаныусанлыҡ та ошонан килеп сыға, сөнки яугир бойороҡҡа ышана, сөнки ул бойороҡто, оранды берҙән-бер тәғлимәт, берҙән-бер дөрөҫ һүҙ итеп ҡабул итә. Ябайлыҡ һыҙаты - шул уҡ нәмә, сөнки ул бер генә кешегә ышана, сардарҙың һүҙен яп-ябай итеп ҡабул итә һәм ул уны тикшермәй. Хәрби кеше күндәм булырға тейеш, уның күндәм булмай сараһы юҡ. Баһымсаҡлыҡ, йыуашлыҡ яугирҙең сардар алдындағы тоғролоғона бәйле, сөнки ул баш күтәрһә йә сардарға ҡаршы сыҡһа, бик күңелһеҙ хәлдәргә, ҡырҡа мөнәсәбәткә тарыуы бар. Ә бына моңлолоҡ менән үпкәселлекте икенсе төрлөрәк аңлатырға мөмкин. Ни өсөн яугир үпкәсел һуң? Сөнки ғәскәр күп кешенән тора. Сардарҙан тыш, йөҙ башлыҡтары, ун башлыҡтары, уларҙың ярҙамсылары бар һәм уларҙың араһындағы төрлөсә мөнәсәбәт, уларҙың яугирҙәргә мөнәсәбәте тигеҙ генә булмай. Бер яҡта - ҡатынан да ҡаты хәрби ҡанун, икенсе яҡта - төрлө кимәлдә һуғышҡан яугирҙәр. Әйтәйек, сардар йә ун башы ҡайһылыр бер яугиргә яҡшы һуғышҡаны өсөн трофейҙан өлөш сығарырға йә булмаһа башҡа төрлө дәртләндереү сараһы билдәләргә вәғәҙә бирә лә, уны үтәй алмай, яуҙа һәләк була икән, ти. Яугир үпкәләй. Һәм ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Сөнки ул үҙенең ябайлығы, күндәмлеге, баһымсаҡлығы, йыуашлығы, түҙемлелеге менән сардарҙың әйткән һүҙенә ышана ине. Нисек инде, сардарҙың һүҙе үтәлмәй ҡала, улай булыуы мөмкин түгел, тип уйлай ул. Ә моңға килгәндә инде, башҡорт халҡының иң күп йыры хәрби тормошҡа бәйле тыуған. Яу үтә, унда күпме кеше ҡырыла, күптәренең туғандары һәләк була, уларҙы ерләйҙәр. Шул сағында моң килмәй, ни килһен инде?

***✓ Менталитетты үҙгәртеп була, әммә уны ыңғай яҡҡа үҙгәртергә кәрәк. Беҙ үҙебеҙҙең булдыҡлы икәнебеҙҙе бар донъяға күрһәтергә тейешбеҙ. "Эй, беҙҙең халыҡтан барыбер булмай ул", - тип әйтеүселәр генә булмаһын.***

# Бирмәйәсәк,

## менталитеты тураһында…

"Урал", "Салауат", "Бүгәс", "Кутузов", "Байыҡ", "Француз көйө", "Ғәзебәк Насыр", "Илсе Ғайса", "Каһарман кантон", "Порт-Артур", "Каруанһарай", "Абдрахман батыр", "Әрме", "Эскадрон", "Каһым түрә", "Тәфтиләү", "Любизар", "Яу", "Һыр", "Уйыл", "Азамат" кеүек йырҙар хәрби тормошҡа бәйле тыуған һәм улар йыр сәнғәтебеҙҙең алтын фондын тәшкил итә. Беҙ моңобоҙҙоң бер генә нотаһын ишетһәк тә, тәндәребеҙ зымбырҙап китә.

Мин милли һыҙаттарыбыҙҙы тик ошолай ғына аңлата алам. Беҙ шулай булғаныбыҙ өсөн генә күп кенә ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап ҡала алғанбыҙ. Мин тағы ла батырлыҡ һыҙатын ғына билдәләп үтер инем. Һуңғы Бөйөк Ватан һуғышында геройҙар һәм Дан ордены кавалерҙары иҫәбе буйынса Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы ошондай һәм башҡа ҙурыраҡ формированиелар эсендә беренсе урында тора. Ошо ғына миҫал да батырлыҡтың ни тиклем дәрәжәлә икәнен күрһәтеп тора.

**В. САФИН:** Һыҙаттарыбыҙҙың нигеҙендә тәбиғәт ятыуын да өҫтәр инем. Ни өсөн тигәндә, моңобоҙҙа шишмә сылтырауы ла, күк күкрәүе лә, урман шаулауы ла, кәкүк саҡырыуы ла бар. Юғарыла һанап үтелгән һыҙаттар беҙҙе һаҡлай һәм беҙҙе милләт итеп йәшәтә икән, беҙгә шул һыҙаттарыбыҙҙы һаҡларға, үҫтерергә, яңыртырға кәрәк. Милли рух тәрбиәләү ҙә ошо һыҙаттарҙы һаҡлауға йүнәлдерелергә тейеш. Ошо һыҙаттарыбыҙ юғалыуы милләтебеҙҙең башҡалар араһында ирәп юғалыуын аңлатасаҡ. Мәскәү ҙә беҙҙең ошо һыҙаттарыбыҙҙы юйыу өҫтөндә эшләй. Һуңғы ваҡыттағы төбәк компонентын юҡҡа сығарыу ҙа - шуның бер сағыу миҫалы. Биш йыл элек Мәскәүгә барған саҡта бер нәмәгә аптыраным: йәш, көслө психологтарҙың барыһын да Кремль аппаратына алғандар. Бөгөн Рәсәйҙәге милләттәрҙе юҡҡа сығарыу буйынса унарлаған психологик лаборатория эшләй. Әле тарихты фальсификациялауға ҡаршы яңы орган барлыҡҡа килде, әммә мин уның нимә менән шөғөлләнерен бик яҡшы беләм. Тарих, киреһенсә, боҙоп күрһәтеләсәк улар тарафынан. "Эхо Москвы" радиоһында тауыш биреү үткәрҙеләр. Ике мең кешенең 89 проценты был органды репрессия һәм фальсификация органы, тип таныны.

**▸ "Үҙеңдеке үҙеңә яу", - тигән мәҡәл-әйтем дә бар. Быйыл бер башҡорт милләтенән булған район хужаһы күп кенә объекттарында үҙебеҙҙең егеттәрҙе төрлө райондарҙан йыйып, эшен эшләтте лә, төрлө сәбәптәр табып, уларға бер тин дә түләмәне. Икенсе бер шундай уҡ район хужаһы, киреһенсә, объекттарын грузиндарға тапшырып ҡуйҙы. Уларҙы инде үҙегеҙ беләһегеҙ, урындағы халыҡ менән конфликтҡа инеп, ҡан ҡойғос драматик хәлдәр булып алды. Бына ошондай хәлдәргә ниндәй баһалар бирә алаһығыҙ?**

**В. САФИН:** Тәүге хужа ни өсөн үҙебеҙҙең егеттәргә мөрәжәғәт иткән һуң? Сөнки башҡалар унан аҡсаны күп һорар ине һәм ул эшселәргә эш хаҡын мотлаҡ түләргә мәжбүр булыр ине, хатта үҙенең кеҫәһенән сығарып булһа ла. Икенсе хужа күберәк үҙенең кеҫәһен ҡайғыртҡан тип фаразларға була, сөнки беҙҙең милләт кешеләре ришүәт бирә лә, уны ала ла белмәй, барыбер тотола. Ә грузиндарға нимә инде, шап-шоп эшләйҙәр ҙә, хужаны риза итәләр ҙә, һуңынан тап инде уларҙың эҙен.

Тағы ла бер ҡыҙыҡлы күренеш. Ырымбур өлкәһенән килгән Фәрит атлы егет 20-30 өйҙән торған башҡорт ауылдарының бөтөүе, улар янындағы татар, мордва, урыҫ, немец ауылдарының һаҡланып ҡалыуы хаҡында аптырап һөйләне. Бер үк шарттарҙа йәшәгән, шул уҡ ваҡытта тарихи башҡорт ерендә, башҡорт ауылы ниңә юҡҡа сыға һуң? Бына, Ғәлим Афзал улы, һеҙ әйткән ғәскәрилек менән генә аңлатып булалыр. Элекке яугир һаман да өҫтән, сардарҙан нимәләр көтә. Ул ни эшләргә белмәй, сөнки

***▸ Арҡайым дәүерендә Урал буйында һәм уға терәлеп ятҡан далала иран телендә һөйләшкән йәмғиәтте тәшкил иткән халыҡ башҡорт тип аталған да инде. Ул хәнгә, вәлиәттә ҡағанға хеҙмәт иткән. Ул саҡта был төбәктә 28 ҡала булған.***

ғәскәри хеҙмәт уның ҙаллылығын юҡҡа сығарған. Шулай итеп, беҙ һанап үткән һыҙаттар бында нәҡ киреһен эшләй, йәғни сардарҙың килеүенә ышаныусанлығы яугирҙе харап итә. Иван Грозный заманында, унан һуң да башҡорт ауылдары янында бик күп урыҫ, татар, мордва, сыуаш, мари ауылдары барлыҡҡа килгән. Бөгөн нимә күрәбеҙ һуң? Күберәк башҡорт ауылдары юҡҡа сыға, бөлгөнлөктә йәшәй. Ни өсөн? Әлеге лә баяғы, сардарҙан көтөп ултырыу күренеше. Ситтән килгәндәр, аҫаба башҡорттар беҙҙе ҡыуып ебәрер, тип, киреһенсә, ойоша, ә ерле халыҡ "беҙ ерле халыҡ, беҙ ошо ерҙең хужаһы", - тип, вайымһыҙ ғына йәшәй бирә.

**Ғ. ХИСАМОВ:** "Үҙеңдеке үҙеңә яу" - бик үткер әйтем һәм ул беҙҙең менталитетты характерлай. Беҙ йыш ҡына, үҙебеҙҙекенә үҙебеҙ ярҙам итәбеҙ, тип алданып та ҡалабыҙ. Йәғни, үҙебеҙҙең ышанған кешебеҙ үҙебеҙҙең башҡа һуға. Үҙемдән баштан үткән бер хәлде миҫал итеп килтерәм. Бер мәл егеттәр менән һөйләштек тә, ҙур ғына майҙанды ҡуртымға алдыҡ. Майҙанды минең исемгә яҙҙырҙыҡ. Мин егеттәргә тулы ҙаллылыҡ бирҙем. Һуңынан нимә килеп сыҡты: мин ул майҙандан бер тин файҙа алмаһам да, аренда хаҡын түләргә тейеш булып сыҡтым. Был баяғы ышаныусанлыҡтың нимәгә килтереүенә асыҡ миҫал. Бында беҙҙең милләткә хас булмаған алдау һыҙаты барлыҡҡа килеүенә шаһитбыҙ. Был сифат беҙҙә үҫә бара.

**В. САФИН:** Беҙҙә алдау нисек барлыҡҡа килә һуң? Быуаттар буйы беҙгә ситтән килгәндәр беҙҙе алдау юлы менән еребеҙҙе,байлыҡтарыбыҙҙы үҙләштерә. Шуға күрә беҙҙәге алдау уларға ҡаршы тороу рәүешендә барлыҡҡа килгәндер, тием.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Минең ҡартатай Петроградта башҡорттарҙың атлы ғәскәре сафындағы бөрйән ырыуы башҡорттарының бала кеүек бер ҡатлы, иҫ киткес саф күңелле булыуҙары хаҡында һөйләй торғайны. Улар хатта һүгенә лә белмәгән, иң ҡаты һүгенеү һүҙҙәре "тыума" булған. Хәҙер улар нисә ҡатлы итеп һүгенә белә икән? Әгәр ҙә менталитет тарихи менталитет булған сүрәттә лә, үҙгәреүгә һәләтле икән, был - ысынбарлыҡ. Ә ниңә менталитет үҙгәрмәҫкә тейеш һуң әле?



"Күмәкләгән - яу ҡайтарған" - тигән мәҡәлде лә онотмайыҡ. Беҙ күмәкләһәк, әллә нимәләр эшләй алабыҙ, һәләтебеҙҙе юғалтмағанбыҙ. Ваҡытында беҙ Вадим ағай менән башҡорт халыҡ фирҡәһен ойоштороп йөрөнөк. Шундай ойошмаларҙы хәҙер киренән төҙөргә тейешбеҙ. Әгәр ҙә беҙҙең йәшебеҙ үткән икән, йәштәр бар бит. Беҙ бөтөнләй төшөп ҡалған халыҡ түгел бит. Бөгөн беҙҙең халыҡҡа зыян килтергән бер күренеш хаҡында әйтәм. Радио-телевидение иртәнге сәғәт 7-нән башлап, кис йоҡлап киткәнсе, башҡорт тормошонан асылда йыр һәм бейеүҙе генә күрһәтә һәм яңғырата. Әйтерһең, тормошобоҙҙоң башҡа яҡтары юҡ. Был беҙ һанаған һыҙаттарҙы юҡҡа сығарыуға килтерә. Йәнәһе, беҙҙә барыһы ла ал да гөл, шуға күрә йырлап-бейеп кенә йәшәйбеҙ. Нимә, проблемаларыбыҙ юҡмы ни? Ә ни эшләп була был осраҡта? Бик ябай, сөнки беҙ бит хәрби милләт. Хәрби милләткә иртәнсәк нимә кәрәк? Марш кәрәк. Иртәнсәк радио һәм телевидение тапшырыуҙарын марш менән ас, бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтеләсәк. Хатта бер-ике айҙан милләтебеҙҙең күҙе икенсе төрлө асыласаҡ. Нишләп "Киске Өфө" гәзите генә ошондай проблемаларҙы күтәрә? Элекке министр булараҡ, ҡайһы гәзит-журналдың нимә яҙғанын һәм нимәгә һәләтле икәнен бик яҡшы беләм. Әгәр ҙә халҡыбыҙҙы тереләй ергә күмәбеҙ тимәһәк, беҙгә башҡа төрлө эшләргә кәрәк. Ярамай былай беҙгә сардарҙан фарман ғына көтөп ятырға. Ышаныусанлыҡтың да, һәлмәклектең дә аҙағы шартлау менән тамамлана. Шартлауҙың файҙаһы юҡ. Баяғы әйтеп үткән 200 ихтилал да шул уҡ шартлау булған. Менталитетты үҙгәртеп була, әммә уны ыңғай яҡҡа үҙгәртергә кәрәк. Беҙ үҙебеҙҙең булдыҡлы икәнебеҙҙе бар донъяға күрһәтергә тейешбеҙ. "Эй, беҙҙең халыҡтан барыбер булмай ул", - тип әйтеүселәр генә булмаһын. Беренсе сиратта шул кешеләр үҙ халҡына ышанырға тейеш.

**▸ Беҙҙең милләт ырыуҙары араһындағы холоҡ-фиғел айырмалығына нисек ҡарайһығыҙ? Әйтәйек, икеһен Ирәндек тауҙары ғына бүлеп ятҡан Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары башҡорттары бер-береһенән шул тиклем айырыла…**

**В. САФИН:** Был ике район башҡорттарында үҙ-үҙҙәрен презентациялау тойғоһо, йәғни милли менталитет көслө. Миненсә, шуға күрә улар араһында беренселек өсөн дәғүәләшеү бара. Тәбиғәттә лә бит шулай: тик көслөләр генә дәғүәләшә.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Беҙ был күренешкә көлөп кенә ҡараһаҡ та, ошонан һуң райондарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу китте. Ул әлегә "Кемдән тирмәһе матурыраҡ, бейегерәк?" формаһында бара. Әгәр ҙә райондарҙы айырып ҡарау шул рәүешле дауам итә икән, һуңғы сиктә, был милләтте айырыуға алып барасаҡ. Бына шул хәл булмаһын өсөн дә Зәки Вәлиди төрки халыҡтарҙы бергә тупларға тырышҡан. Уның һуңғы проекттарының береһе "Ҡырғыҙ-Башҡорт республикаһы" төҙөү булған. Ул проектты Мәскәүҙә ҡабул итә яҙалар. Әммә Мәскәү был ике халыҡтың берләшеүе ниндәй көстө тәшкил итерен белеп, быға юл ҡуймай.

**▸ Психологтар "Характер - кешенең яҙмышы", - тиҙәр. Беҙ характерыбыҙҙы һәм яҙмышыбыҙҙы үҙгәртә алабыҙмы? Был мөмкинме?**

**В. САФИН:** Әгәр ҙә маҡсат булһа, шул маҡсатҡа өлгәшеү ваҡытында кешенең характеры үҙгәреүе мөмкин. Бер мәл олатайым менән икәүләп урмандан сытыр алып ҡайтып киләбеҙ. Еккән атыбыҙ арыҡ, бер үргә менеп етер алдынан атты ла ҡуйҙы. Олатайым атты һуғып та, күтәреп тә ҡараны, әммә күтәрелмәне. Ултырып илап алды. Аптырағас, миңә ҡараны ла: "Нимә эшләйек һуң, улым?" - тип һораны. Мин атты ҡойроғонан күтәреп ҡарауҙы тәҡдим иттем. Тәҡдимемде оҡшатманы. Шунан һуң икәүләп атты ике яҡлап ҡайыҙлап ҡараныҡ. Һуңғы сиктә олатайым ат янына килде лә, уның башын күтәреп, ауыл яғына борҙо һәм: "Ана, ҡара ауылға, унан бесән, һоло, төтөн еҫе килә, ниндәй тәмле, эй, беҙгә ана шул ауылға ғына барып етергә кәрәк", - тип, атыбыҙҙы иркәләй-наҙлай башланы. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, атыбыҙ торҙо ла китте. Шунан һуң олатайым миңә: "Күрҙеңме, уға төтөнлө ауылды күрһәтергә кәрәк," - тигән булды. Хәҙер генә аңлайым мин: атыбыҙ өсөн ул саҡта төтөнлө, һарайлы, бесәнле, һололо һарай маҡсатты тәшкил иткән. Беҙгә үҙ алдына маҡсат ҡуйып, шул маҡсатҡа ирешеп, хәлле йәшәгән кешеләрҙе күберәк пропагандаларға кәрәк.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Беҙ хәҙер яңы башҡортто тәрбиәләү, яңы менталитетты күтәреү хаҡында һүҙ алып барырға тейешбеҙ. Бөгөн беҙҙә үҙебеҙҙән арабыҙҙан сыҡҡан капиталистарҙы күрһәтергә кәрәк. Унда шундай һорау ҡуйылырға тейешле: нисек итеп капиталист булып була? Бер ун йыл тирәһе шундай фекер йәшәне, йәнәһе, башҡорттоң капиталист булырға, байырға хаҡы юҡ. Шул фекерҙе юҡ итергә кәрәк. Сөнки башҡорт, башҡа милләттәр кеүек үк, бөтөн нәмәгә лә һәләтле. Башҡорт капиталист та, ҡол да була ала. Беҙгә ҡол булмаҫ өсөн дә капиталист булырға кәрәк. Бының өсөн үҙеңдең сикләнгәнлегеңде емерергә кәрәк. Бында "Мин кемдән кәм?" - тигән һорау ҡуйылырға тейешле. Вадим ағай маҡсат тураһында бик дөрөҫ әйтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Вадим Сафин тәҡдим иткән башҡорт менталитеты һыҙаттарының статусын билдәләү маҡсатында анкета үткәрҙек. Тауыш биреүҙә журналистар, яҙыусылар, уҡытыусылар, ауыл кешеләре ҡатнашты. Һөҙөмтәлә беҙҙең милләткә иң хас сифат "ЫШАНЫУСАНЛЫҠ" тип табылды. Артабанғы һыҙаттар түбәндәге тәртиптә:**

**-ябайлыҡ;**
**-түҙемлелек;**
**-моңлолоҡ;**
**-йыуашлыҡ;**
**-баһымсаҡлыҡ;**
**-һәлмәклек;**
**-күндәмлек;**
**-үпкәселлек.**

**Вадим Фәтхи улы менән Ғәлим Афзал улы хаҡлы: сираттағы һыҙат алдағыларының эҙемтәһе булараҡ аңлашыла. Мәҫәлән, исемлектең иң аҫтында торған "үпкәселлек"те алайыҡ. Был һыҙат тәүгеләренең эҙемтәһе. Алдағы һандарҙа башҡорт менталитеты, характеры хаҡындағы әңгәмәләр дауам итер, тип уйлайбыҙ.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Дүртенсе тәүлек тигәндә, сағыштырмаса арыулана төшкән Аҫылбаев ғәжәп тәрән йоҡоға талды. Үҙе йоҡлап ята кеүек, үҙенең тын алышы ла һиҙелмәй. Гөлзифа йәнә хафаға ҡала: мәрткә китеп бармағайы был. Китмәне.***






Килбәтһеҙ ялбыр һаҡалы өҫтөнә, тире менән һөйәк тә, сыҡмаған йәне генә ҡалғанлыҡтан, ҡиәфәте ҡот осҡос дуҫының ошондай хәлдә лә мәрәкәләп маташыуына Хәлил хайран ҡала: була бит бошмаҫ кешеләр.

- Әйткәндәреңә тағы нимәләр өҫтәрһең?

- Башҡаса өҫтәрлеге юҡ, - Айбулаттың танауы төшә бирҙе, - күреп торам - ышанмайһың. Уныһы, әлбиттә, һинең эш, ләкин, тағы бер ҡабатлайым, дөрөҫө ошо. Тик һин... был хаҡта башҡа бер кемгә лә һөйләмәҫкә тейешһең.

- Шулай ҙа, һаман икеләнәм, - тине ул сикһеҙ яшыҡ ҡулдарҙы ебәрмәйсә, - бәлки, шаңҡып ҡалыуыңдан, йәғни, ҡурҡышыңдан уны дәү айыу менән бутағанһыңдыр?

- Ҡурҡыштан?! - был юлы Айбулат үпкәләгәндәй итте, - Һин шуны аңла, ул саҡта ҡурҡыу тигән нәмә онотолған ине. Бөтөнләйгә! Аптырап, шаҡ ҡатыуҙан барыһы онотолдо. Мин бөйлән* хәлендә инем. Тәүҙә үҙ күҙҙәремә үҙем ышанманым. Ә әле һине тел менән генә ышандырмаҡсымын.

- Йә, йә, көймә, нервыларың былай ҙа ҡаҡшаған, - күңеле нескәреп киткән дуҫын үпкәләтә яҙған Хәлил аҡланғандай итте, - мин бит ышанмағандан түгел, үҙең әйткәнсә, аптырағандан һорайым, - ул тәҙрә быялаһы ашаһындағы тағараҡта соҡсонған ҡарабаш турғайға ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап торғандан һуң, - бына ни өсөн эт ауыҙында ҡалған йөн киҫәгенең килеп сығышын экспертиза һынлы экспертиза ла асыҡлай, тәжрибәле һунарсылар ҙа әйтә алмаған. Хәҙер бөтәһе лә үҙ урынына ултырып бөттө кеүек: Ҡар кешеһе... Һин, Айбулат, Ҡар кешеһендә "ҡунаҡта" булғанһың!

- Асығыраҡ һөйләһәң ине, Хәлил.

- Тимәк, былай, - койка ситенә ҡабат артын терәгән капитан дауам итте, - һинең йөнбаһыр мәмерйәнән килеп сығыу менән этең уға ташлана. Күрәһең, януарға һанаған. Ә тегеһе, күп уйлап тормаҫтан, уны күҫәк менән йыға һуға. Күҫәк унда ята ине. Ә беҙ ошоно браконьерҙар иҫәбенә сығарып ҡуйҙыҡ.

- Ә Аҡтырнаҡ?..

- Аҡтырнаҡты алып ҡайттыҡ, ул иҫәнһау. Бер аҡлан уртаһындағы ҙур таш янында ятҡан. Башы йәрәхәтләнгән.

Ошонан һуң тынлыҡ урынлашты. Айбулат этенең тере икәнлегенә эстән генә ҡыуанып ҡуйһа, Хәлил үҙ уйҙарына йомолдо. Хәйер, ул йомоҡ уйҙарҙың эстәлеге шунда уҡ асылды ла. Капитан көтмәгән ерҙән:

- Ә уны тағы күрергә булырмы? - тип ҡыҙыҡһына ҡуйҙы.

- Күрергә? - аңшайып киткәнгә һалышҡан Айбулат, ҡалҡынып, терһәгенә таянды, - нимәне?

- Нимәне булһын, һинең ҡунаҡсыл "квартирантты".

- Ә-ә... күрергә... юҡтыр, - тип ҡуйҙы бер талай тын ятҡан Айбулат, - ә бына ишетеүгә килгәндә... Уныһын ойошторорға була.

* * *

Артабан Айбулат үҙенекеләр хаҡында һорашты. Яҡындарының сәләмәтлектә уны көтөүҙәрен белеүҙән ыңғай тәьҫораттар алып ҡыуанды. Йылы ғына хушлашҡандан һуң Хәлил сығыу яғына ыңғайланы. Ошо мәл Айбулат ҡапыл уянып киткән һымаҡ:

- Хәлил! Онотоп ятам, теге ҡыҙыҡайҙы таптылармы? - тип ҡыҙыҡһынды. Инде ишек тотҡаһына тотонған капитанға кире бороло рға тура килде.

- Кеше вайымһыҙлығы менән мәғәнәһеҙлегенең сиге юҡ, Айбулат. һин быны миңә ҡарағанда насар белмәйһең. Әлеге осраҡта ла кешенең ана шул башҡа һыймаҫ сифаттары ярылып ята. Унда бер ниндәй ҙә бала юғалмаған, ә Николай Смолян үҙе башын юғалтҡан булған.

- Нисек? Ҡалайтып? - Айбулат аптырап китте.

- Нисек тип, көндәрҙең береһендә, өйҙәш ҡатынын хәстәханаға һалып ҡайтҡас та, көн менән төндө айырмай, квартираһында ятып эсергә тотонған. Үҙенә билдәле, ҡайһы берәүҙәр, ҡатын саҡ ҡына өйҙә булмаһа, "көтөп алынған" иректән файҙаланып ҡалырға тырыша һала. Ундайҙар хаҡында, бауҙан ысҡынған эт ише, тиҙәр һәм дөрөҫ әйтәләр... Ошо ваҡыт Ырымбур тарафтарынан ғаиләһе менән бажа кеше килеп төшә. Сырхау хужабикәнең хәл-әхүәлен белешкәндән һуң, бер юлайы тиептер инде, тау-урманлы яҡтарға сығып китә былар. Ял итәләр, йәнәһе. Теге ялбыр ҡайын аҫтында үҙҙәренсә мәжлес ҡороп ебәрәләр. Ҡала кешеһенең, әлбиттә, ялы араҡыһыҙ булмай. Оҙайлы һәм сама белмәй эсеүҙән аҡылын юйған Смолян, сығырынан сығып, һәр береһенә бәйләнергә тотона. Электән ғәҙәте шул икән. Бигерәк тә үгәй ҡыҙын йөҙәтеп бөтә. Уныһы, ана шул, юғалған бала була инде. Балдыҙы - ҡатынының һеңлеһе - ҡыҙыҡайҙы йәлләп, яҡлашырға маташҡан. Ошонан һуң Смолян бөтөнләй баш бирмәйсә енләнә башлай, янъял ҡуба. Ҡыҫҡаһы, ҡәҙимге тормош үә ғаилә ғауғаһы - бытовуха. Йәндәре ныҡ көйөп, рәнйегән ҡунаҡтар әлән-борхан йыйыналар ҙа, байғош ҡыҙҙы алып, ҡайта ла китәләр. Лаяҡыл иҫерек Смолян яңғыҙы ятып ҡала. Ямғыр һибәләй башлағас, уянып киткән. Уяныуын уянған, ә иҫенә бер нимә лә төшөрә алмай, имеш. Ниндәйҙер машинала килгәнен, янында ҡыҙы ла булыуын өҙөк-йыртыҡ ҡына хәтерләй - шунан артыҡ түгел. Ҡото алынған хәсрәт үгәй атай аҡыра-баҡыра арлы-бирле йүгерештергеләгән дә шунда уҡ милицияға сапҡан. Беҙҙең белдереүҙән аҙаҡ ҡала хеҙмәткәрҙәре лә эҙләргә тотона. Ә ҡыҙ бала был мәлдә беләһеңме ҡайҙа була?..

- Урманда түгелме ни?

- Көт - урманда. Был мәлде ул Ырымбурҙағы туғандарында көйлө генә йөрөп ята. Әсәйе дауаланып сыҡҡас алып барырбыҙ әле, тип уйлай улар. Төптәнерәк фекер йөрөткәндә, туғандары хаҡлы ла һымаҡ: бәләкәс баланы анауы сәрхүш шизофреник янында ни йөрәгең менән ҡалдырып китмәк кәрәк.

Ишеткәндәренән һеңгәҙәп ятҡан Айбулат баш сайҡап ҡуя: һы, баҡтиһәң, эт сапҡанға бет саба, тигән шикелле, юҡ артынан йөрөгән булған икән. Үкенергәме быға, әллә көлөргәме?..

* * *

- Алло! Аҫылбаевтар фатирымы? - теге остан таныш телмәр ишетелде. Хәлилдең үҙенсәлекле көр тауышы Гөлзифаның ҡапыл ғына ҡабынған йөрәге менән ярһып киткән күңелен баҫа төштө.

- Эйе, эйе, был мин... беҙ... - ул ҡабалан яуап бирҙе.

- Әйтегеҙ миңә: әлеге минутта аяғөҫтө тораһығыҙмы?

- Эй-йе, ә ниңә? - тине ул ҡаушап.

- Ул сағында ултыра һалығыҙ, - хистәрен ауыҙлыҡлап тота алмаған Хәлил оторо шарҙыуанланды, - ултыр, Гөлзифа, әтү ҡолап китерһең!..

Шунда уҡ һәммәһенә төшөнөп алған ҡатын, ысынлап та, лыпым ултыра төштө. Уға инде артабан һөйләп тороу ҙа кәрәкмәй: иртәнсәктән ҡабаҡтары тартып, ниҙер булырын һиҙә ине, бына ырымланыуы юш сыҡты түгелме. Аллаға шөкөр, хәбәрҙең яҡшыһын ишетергә насип иткән. Ҡапыл ғына күңеле йомшаған Гөлзифаның нисәмә көндәр буйына быуылып торған хәсрәт даръяһы ошо урында йырылды ла китте: ул, бынан ары тыйып торорлоҡ көс таба алмайса, шатлыҡ-ҡыуаныс күҙ йәштәренә тулы ирек бирҙе.

Карауатында йылмайып ятҡан ир йоратының Айбулат икәнлегенә Гөлзифа ышанмағандай торһа, сабыйҙарға ғына хас бер ҡатлы илгәҙәк Гөлкәй, хатта ҡурҡып китте. Ҡурҡырһың да. Йәмһеҙ ослайып ҡалған яңаҡтар ҡалын ҡара һаҡал аша ла беленеп тора, сәстәре ялбырап үҫеп киткән. Шул арҡала ғәләмәт оло күренгән башы кесерәйеп ҡалған кәүҙәһенә һис тура килмәй. Ә ҡулдары һуң, ҡулдары! Тамыр әҫәре беленмәгән кескәй ҡулдар ҡаҡ һөйәк тә, үтә күренмәле тиренән генә тора һымаҡ.

Ошоларҙың барыһына өҫтәп, күҙҙәренә ҡара таҫма тартылған атаһы киноларҙа күргән юлбаҫарҙарға оҡшап ҡалғанғамы, Гөлкәй башта уға яҡын да барманы. Уныһы нимә, бер килке, хатта, был минең атайым түгел, тип ҡырталашты. Күмәкләшеп өгөтләй торғас, көскә әүрәтә алдылар. Уның янына барырға күнер-күнмәҫ торған ҡыҙыҡай, шунда ла, карауат ситенә һаҡлыҡ менән генә барып ултырҙы. Ғәзизен шунда уҡ ҡосаҡлап алған Айбулат уның сәсенән һыйпаны, тупылдатып арҡаһынан һөйҙө лә... илап та ебәрҙе.

Ахыр сиккә етепябыҡҡан булһа ла, тәүге көндө хәле арыу ғына күренеп, һин дә мин ятҡан Айбулат өсөнсө тәүлеккә сыҡҡанда ҡапыл сәсрәп ауырыны ла китте. Уның көтмәгән ерҙән тән температураһы ҡырҡа күтәрелде, ҡан баҫымы ҡурҡыныслы кимәлгәсә төштө. Башта биҙгәк тотоуҙан ныҡ ҡалтыранһа, һуңынан аяҡ-ҡулы тартыша башлап, ахырҙа, бөтөнләйгә һушын юйҙы. Иҫенә килә алмайса ул ике тәүлек буйына баҫлығып ятты, һаташыу ҡатыш әллә нимәләр һөйләп ҡысҡырынды.

Дүртенсе тәүлек тигәндә, сағыштырмаса арыулана төшкән Аҫылбаев ғәжәп тәрән йоҡоға талды. Үҙе йоҡлап ята кеүек, үҙенең тын алышы ла һиҙелмәй. Гөлзифа йәнә хафаға ҡала: мәрткә китеп бармағайы был. Китмәне. Тылсымлы әкиәт батырҙары кеүек ике көн, ике төн йәнһеҙ ятҡан Айбулат, өсөнсө тәүлек тигәндә, ниһайәт, ҡапыл ғына уянып китте. Күңеленә төшөнкөлөк һулышы ҡағылып, әллә нимәләр уйлай башлаған Гөлзифа уны ҡосағына ҡыҫып сеңләне.

Башындағы йыртыҡ яраларҙы теккәндән һуң хәле ыңғай яҡҡа үҙгәрә барған Айбулат аҙна тигәндә инде түшәгендә тороп ултырырға эшкинде. Тағы бер нисә көндән, уның өсөн төн ҡараңғылығы тыуҙырған таҫманы сисеп, ҡара күҙлек кейҙерҙеләр. Эй-й, ҡыуаныуы шунда. Һуң, ҡыуанмай, көңгөрт быяла аша булһа ла ҡабат яҡты донъяға баҡты ла баһаң! Шул ҡәҙәрем танһыҡ булып киткән яҡты донъяға баҡты ла, туғандары менән яҡындарының йөҙҙәрен күреү бәхетенә ирешә. Әйҙә, ул йөҙҙәр әлегә бер аҙ борсоулы ла, бер аҙ һағышлы ла булһын. Булһын! Ләкин бит улар, ана, Айбулаттың ҡаршыһында.

Һаҡал-мыйығын ҡырып, матурланған Айбулатҡа хәстәхана карауатында оҙаҡ ҡына - ике айҙан ашыу - әйгәҙәп, хөкүмәттең тоҙһоҙ һурпаһын һемерергә тура килде. Уның ныҡ ҡаҡшаған нерв күҙәнәктәрен дә, һалҡын тейеүҙән үпкәһенә инеп оялаған сирҙе лә бер юлы дауаланылар, һәм уңышлы ғына. Былары нан тыш, дистрофия, тип аталған әкәмәт ғилләһе үҙәгенә үткәргән ине. Шулай ҙа, йәш, көслө организм бирешмәне һәм, ауырлыҡ менән булһа ла, бар ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сыға алды. Ул әкрен-әкрен генә элеккесә киң күңелле, тормошто үҙенсә раҫлаусы һәм йәшәйешкә ышаныс менән ҡараған Айбулатҡа әүерелә барҙы.

* * *

Иҫ киткес бер төрлө, шунлыҡтан ялҡыҡтыҡыс көндәрҙең береһендә, яңғыҙы ҡалып, һәүетемсә генә фани донъя мәшәҡәттәре, көн итмеш мәғишәттең бөтмәҫ-төкәнмәҫ ығы-зығыһы тураһында фәлсәфәүи уйҙар уйлап ятҡанында палатаһына дүрт кеше килеп инде: ике бала ла, ир менән ҡатын. Күренеп тора - бер ғаилә. Бәләкәс ҡыҙыҡай әсәй етәгенән айырылмаҫҡа тырышһа, ун йәштәр самаһындағы малайҙың күҙҙәре уйнай ғына. Ул инде, күрәһең, үҙаллылыҡ менән азат тормоштоң бәйәһен яҡшы белә. Ете-ят кешеләрҙең үҙҙәрен ошолай иркен һәм тәбиғи тотоуҙарына һис аптырамаған Айбулат, яңылыш килеп юлыҡты былар, тип уйланы. Халыҡ мыжғып торған хәстәханала ундайы ғына булғылай...

- Аҫылбаев һеҙ булаһығыҙмы?

- Эй-йе, мин булам, - көтөлмәгән һорауҙан Айбулат ҡаушай төштө: әллә инде берәй туғандарын танымай тора? - тик... мин һеҙҙе белмәйем шикелле.

- Танымаһаң да, ҡустым, аптырарлығы юҡ - һин бит иҫһеҙ инең, - тәү ҡарашҡа баҙнатһыҙ ғына күренгән, сандыр кәүҙәле ғаилә башлығы телгә килде, - беҙ теге... һеҙҙе ошонда алып килгән кешеләр... Мин үҙем - Дәүләтбай ағаң булам, еңгәңде Асия тиҙәр. Хәлегеҙҙе белешергә, тип һуғылған инек. Сүтике...

- Ә-ә! Һеҙҙең хаҡта ишетә биреп ҡалғайным! - Айбулат ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй китте, - тимәк, һеҙ - минең ҡотҡарыусыларым...

- Шулайыраҡ килеп сыға.

- Рәхмәт һеҙгә. Барыһы өсөн дә. Һеҙ булмағанда...

- Ҡуйығыҙ инде-е, беҙҙең урында һәр кем шулай итер ине. Бына минең малай күреп ҡалған әле ул... ағып барғанығыҙҙы.

- Мәрҙәс! Егет икән. Кил әле бында, ҡустым, - Айбулат малайҙың йомшаҡһалҡын ҡулын ҡайнар усына йомдо, - давай танышайыҡ.

- Давай, мин - Батырша булам.

- Оһо! Исемең дә есемеңә тап килеп кенә тора икән.

- Ә мин һеҙҙе иҫереккә һанаған инем, - ошоғаса өндәшмәй торған ҡатын ауыҙын баҫып көлдө, - эсеп һыуға ҡолаған ҡарт асарбаҡ тип уйланым. Баҡтиһәң, һеҙ, ана, йәп-йәш егет икәнһегеҙ.

- Дәүләтбай ағай, ул көн тураһында ентекләберәк һөйләһәгеҙ ине, ә, - Айбулат ялбарғандай итте. Тегеһе һис инәлтеп торманы.

...Ғаиләһе менән балыҡҡа тип сыҡҡан булғандар икән. Беҙҙеңсә әйткәндә, ялды файҙалы шөғөл менән берләштерәләр, йәнәһе. Әммә, көҙ - көҙ инде, һыу һалҡынлығынан ҡаны ойой башлаған балыҡ ҡармаҡҡа ҡаба һалып бармай. Алған

*бөйлән - шок.

ИНТЕРНЕТТАН

# ЙҮГЕРҺӘҢ...

## яҡшыраҡ күрерһең

● Йүгереү йөрәкте һәм ҡан әйләнеше системаһын нығытып ҡына ҡалмай, күҙҙәр өсөн дә файҙалы, ти сит ил офтальмологтары. Мәҫәлән, ул айырыуса күҙ яҫмығы тоноҡланып, катаракта башланғанда һәм башҡа ҡайһы бер ауырыуҙарҙан ҡотолорға ярҙам итә. АҠШтың Беркли биҫтәһендәге Лоуренс исемендәге милли лаборатория врачтары 41 мең йүгереүсегә ете йыл буйына тикшереүҙәр үткәргән. Һөҙөмтә шундай: ни тиклем йышыраҡ һәм ҙурыраҡ араға йүгергән һайын, уларҙың күҙҙәре әлеге сирҙәргә бирешмәйенсә, сәләмәт булып ҡала килгән.

● Ғалимдар химик элемент калийҙың ҡан тамырҙарын һаҡлау сифатына торған һайын йышыраҡ иғтибар бирә. ГФР университеты клиникаһы физиологтары аңлатыуынса, калий ҡан тамырҙарын уны "эзбизләнеүҙән" һаҡлай торған эндотелий күҙәнәктәрен эшләп сығарыуҙа төп роль уйнай. Ябайлаштырып әйткәндә, эндотелий - ул йөрәк, ҡан һәм лимфа тамырҙарының эске ҡыуышлығын һаҡлап, ҡаплап тороусы күҙәнәктәр ҡатламы. Ғалимдар эндотелий ҡалынлығының ҡанда тупланған калийға туранан-тура бәйле булыуын асыҡлаған.

● Нигеҙҙә, емеш-еләк, йәшелсә менән туҡланыу, тәмәке тартмау, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡмау һәм даими физик әүҙемлек - кешене сәләмәтлеккә илтеүсе дүрт юл, дүрт ҡанун. Ошо тормош ҡанунын тотоп йәшәүселәр араһында мейегә ҡан һауыу осраҡтары 50 проценттан ашыуға кәмерәк, тип раҫлай Бөйөк Британияның Норфолк графлығы университеты ғалимдары. Улар 11 йыл буйына 40 йәштән өлкәнерәк 20 мең кешенең сәләмәтлек торошон күҙәтеү аҫтында тотҡандан һуң, ошондай фекергә килгән.

● Израилдең Вейцман исемендәге институты ғалимдары яңы яһалма кимерсәк уйлап тапҡан. Ул ошоға тиклем медицина практикаһында ҡулланылып килгән яһалма быуын менән сағыштырғанда ауырлыҡ күтәреүҙә күпкә сыҙамыраҡ. Яңы кимерсәк - ул асылда электрҙан зарядландырылған полимер молекулалар (улар бик бәләкәй, йәғни нонокиҫәксәләр) һәм уларға йәләп ителеүсе һыу молекулалары. Тап шулар ярҙамында быуындарҙың бер-береһе менән ышҡылыу көсө кәмей, ә ауырлыҡ күтәреү һәләте арта.

● Ҡыш тыуған балалар ҡурылдай астмаһы менән өс тапҡырға йышыраҡ сирләүсән була, тип хәбәр итә Америка ғалимдары. Улар был хаҡта, һәр ваҡыттағыса, раҫлап ҡына ҡалмайынса, сәбәптәрен дә аңлатып бирә. Элегерәк был сирҙең сәбәптәрен ҡышҡы осорҙа тын юлдары вирусының киң таралған мәл булыуына бәйләһәләр, әле иһә ҡыш һауала саң һәм үңәҙ һеркәләренең күпләп тупланыуы менән аңлатыла.

● Америка ғалимдары асыҡлауынса, ашҡаҙан аҫты биҙенең яман шеш сире кешенең ниндәй ҡан төркөмөнә ҡарауына бәйле. 100 мең кешенең һаулыҡ торошон тикшергәндән һуң, ғалимдар ҡаны I төркөмгә ҡараған кешеләрҙең ашҡаҙан аҫты биҙе менән бик һирәк сирләүе, ә III төркөм ҡанлыларҙың был сиргә йыш бирешеүен асыҡлаған. "Әгәр I төркөм ҡанды өлгө рәүешендә ҡараһаҡ, ҡаны II төркөмгә ҡараған кешеләрҙең яман шеш менән ауырыу хәүефе - 32, III төркөм өсөн - 72, ә IV төркөм өсөн 51 процентҡа арта", - тип раҫлай тикшеренеүселәр. Шул уҡ ваҡытта улар III төркөм ҡан йөрөтөүселәрҙе, сирҙе ваҡытында асыҡлау өсөн, ашҡаҙан аҫты биҙҙәрен УЗИ ярҙамында йышыраҡ тикшереп торорға саҡыра.

● Йөрәк сирлеләр өсөн ҡәһүә файҙалы, тип раҫлай Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары. Улар инфаркт кисергән 1300 кешенең һаулыҡ торошона 10 йыл буйы тикшеренеүҙәр алып барған һәм шундай һығымтаға килгән: көнөнә 1-3 сынаяҡ ҡәһүә эскән кеше өсөн инфаркттан үлеү хәүефе - өстән бер өлөшкә, ә 5-7 сынаяҡ эскәндәргә яртылашҡа кәмей.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ТАШҠАБАҠТА...

## сер йәшенгән

**Һутлы һәм шәрбәтле ҡарбуҙ, гәрәбәләй виноград, ал-ҡыҙыл алмаларға әүрәп китеп, көҙҙөң баҫалҡы, ләкин витаминға бай, үтә лә файҙалы емештәре - ташҡабаҡ, баклажан, оҙонса ҡабаҡ, патиссон кеүек йәшелсәләрҙе лә оноторға ярамай. Мәләндә уларҙы ла туҡланыу рационында мөмкин тиклем йышыраҡ ҡулланыу ифрат файҙалы буласаҡ.**

### Ташҡабаҡ

Уның хуш еҫле йомшағы витаминдарға бик бай: аскорбин, В төркөмө витаминдары, А, Е һәм ҡан ойошоу һәләтенә тәьҫир итеүсе витаминдары бар. Һирәк осрай торған Т витамины иһә ташҡабаҡты һыйыр ите, сусҡа ите һәм башҡа майлы ризыҡтар өсөн гарнир рәүешендә әҙерләргә мөмкинлек бирә, сөнки ташҡабаҡ ундай ризыҡтарҙы еңел үҙләштерергә булышлыҡ итә. Өҫтәүенә, ташҡабаҡта тимер миҡдары бик күп, был йәһәттән ул башҡа йәшелсәләр араһында беренсе урында тора. Тимаҡ, был йәшелсә ҡулланырға яратыусыларҙың кәйефе һәр саҡ шәп, ә йөҙҙәренең төҫө сәләмәт, матур була. Ташҡабаҡтың тағы ла серле үҙенсәлектәре бар: уның һуты ирегеттәргә үҙҙәренең ирлек ҡеүәһен оҙағыраҡ һаҡларға мөмкинлек бирә. Уның орлоҡтарын да ошо уҡ маҡсаттарҙа ҡулланырға була. Ташҡабаҡ орлоҡтарын борон "сихырлап һөйҙөрөүсе" эсемлек әҙерләүҙә юҡҡа ғына файҙаланмағандар, күрәһең.

### Баклажан

Уның кеүек сәйер йәшелсәне күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Шәмәхә төҫө генә лә ни тора! Боронғо гректар баклажанды "аҡылһыҙлыҡ алмаһы" тип атаған һәм уны ашаған кешенең аҡылына зыян килә, тип уйлаған.

Европалылар баклажанды Американы асҡандан һуң ғына тәмләп ҡарарға батырсылыҡ иткән, сөнки Европа сәйәхәтселәре Америка индеецтарының был шәмәхә төҫлө йәшелсәне күпләп үҫтереүен, яратып ризыҡланыуын һәм уларҙың аҡылына бер зыян да булмауын күргәндәр.

Баклажанда бер аҙ С витамины, байтаҡ ҡына В төркөмө витаминдары бар, тап улар ярҙамында кешенең нервылар системаһы нығына. Улар шулай уҡ депрессия һәм йоҡоһоҙлоҡтан арынырға ярҙам итә.

Ҡатын-ҡыҙ өсөн дә был йәшелсәнең сере бар: йөҙөгөҙ йыйырсыҡланмаһын өсөн йышыраҡ баклажан ашағыҙ, ул тиренең дым һаҡлау үҙенсәлеген көсәйтә. Йәшелсәләге ҡайһы бер матдәләр тире туҡымаһының яңырыуына, хатта яраларҙы тиҙ бөтәштереү һәләтенә эйә.

Баклажан марганец, тимер һәм цинкҡа бай, шуға күрә ул аҙ ҡанлылыҡтан яфаланыусылар өсөн айырыуса файҙалы. Йөрәк һәм ҡан тамырҙары сире булғандар өсөн дә ул алыштырғыһыҙ ризыҡ, сөнки холестеринды кәмета. Бынан тыш, баклажандағы калий тоҙҙары йөрәк эшмәкәрлеген нығыта, организмдан артыҡ шыйыҡсаны ҡыуҙыра.

Диетологтар иһә ябығырға теләүселәргә ошо йәшелсә менән туҡланырға кәңәш итә. Уның 100 грамы ни бары 28 килокалорияға эйә, өҫтәүенә, бая әйтелгәнсә, ул организмдан артыҡ шыйыҡлыҡ һәм зарарлы ҡалдыҡтарҙы сығарыуға һәләтле күҙәнәклектәргә бай.

Шул уҡ ваҡытта бер генә "ләкин" тураһында ла әйтмәй булмай: баклажанға әсерәк тәм биреүсе соланин тигән матдәнән ҡотолоу өсөн йәшелсәне тоҙло һыуҙа тотоп алыу кәрәк, юғиһә, был матдәнән (ул үтә өлгөргән баклажандарҙа күп була) ҡыҙыл үңәс һәм ашҡаҙан ялҡынһыныуы ихтимал.

### Патиссон

"Осоусы тәрилкә"гә оҡшаш был йәшелсә организмдан зыянлы холестеринды сығара, күҙҙәргә яҡшы тәьҫир итә. Был йәһәттән айырыуса уның аҡ төҫтәгеһе түгел, ә асыҡ һары сорттары һәйбәт. Йәшелсәнең орлоҡтары бауыр өсөн файҙалы, матдәләр алмашыныуын яҡшырта, организмдан тоҙ ҡалдыҡтарын ҡыуҙыра, шул арҡала уны подагра сирен дауалауҙа ҡулланалар.

Витамин йәһәтенән патиссон ҡабаҡҡа ҡарағанда байыраҡ, ә ташҡабаҡтан бер аҙ ҡалыша, ләкин даими ҡулланған кешеләр уны файҙаһынан бигерәк тәме өсөн нығыраҡ ярата, сөнки ул бер нисә төр йәшелсә тәмен бирә: артишок, спаржа, бәшмәккә лә оҡшаш, шулай уҡ аҙ тоҙланғаны ҡыярҙы ла хәтерләтә.

### Ҡабаҡ

Аҡ ҡабаҡ һәм һыҙатлы цукини сорттары С витаминына бай, ә ул коллаген эшләп сығарыуҙа ҡатнаша. Был кеше тиреһенең һығылмалы һәм шыма булыуына бәйле. Һейҙәк ҡыуҙырыу үҙенсәлеген иҫтә тотоп, был йәшелсәне йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына ҡаршы файҙаланырға кәңәш ителәр. Шәкәр диабеты, атеросклероз, бауыр сирҙәрендә файҙалы, үт ҡыуҙырыу һәләтенә эйә. Калий һәм баҡырға бай булыуы менән ул аҙ ҡанлылыҡ сиренән алыштырғыһыҙ сараларҙың береһе. Бынан тыш, холестеринды һеңдереүгә юл ҡуймайынса, ул эсәк эшмәкәрлеген көйләй.

Ҡабаҡтың калориялығы ла бик түбән - ни бары 23 килокалория. Күҙәнәклеге аҙ булыу сәбәпле, ашҡаҙан -эсәк ауырыуҙары һәм метеоризм менән яфаланғандар өсөн дә ул хәүеф тыуҙырмай.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
әҙерләне.



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

### Йәшел сәй инфарктты еңә

Көнөнә өс сынаяҡ йәшел сәй эсеү инфаркт хәүефен кәметеүгә булышлыҡ итә, тип иҫәпләй АҠШ-тың Калифорния штаты университеты ғалимдары.

Быңдай һығымтаға улар 195 мең кешенең (шуларҙың 4 меңе инфаркт кисергән) йәшәү рәүешен өйрәнгәндән һуң килгән. Асыҡланыуынса, көнөнә өс сынаяҡ йәшел сәй эскән кешеләргә инфаркт янауы 21 процентҡа кәмегән. Йәшел сәй составындағы антиоксиданттар тап ана шундай һаҡлау үҙенсәлектәренә эйә лә инде.

### Йөрәгеңә яҡын алма

Уңышһыҙ никахтың ҡатын-ҡыҙҙарҙа йөрәк һәм ҡан тамырҙары сирҙәре үҫешеүенә килтереүе асыҡланған.

Ғалимдар 300-ҙән ашыу ғаилә иштәренең тормошон ентекләп тикшергәндән һуң ошондай фекергә килгән. Ғаилә тормошонан ҡәнәғәт булмаған ҡатын-ҡыҙ һимереүҙән, ҡан баҫымы күтәрелеүҙән, ҡан составында шәкәр кимәле һәм холестерин юғары булыуҙан яфалана. Шул уҡ ваҡытта никахынан ҡәнәғәт булмаған ирҙәрҙә был күрһәткестәрҙең нормала булыуы асыҡланған. Бының нилектән шулай булыуын ғалимдар психологик йәһәттән никахтың ҡатын-ҡыҙ өсөн ирҙәргә ҡарағанда мөһимерәк булыуынан сығып аңлата. Шуға күрә лә ҡатын-ҡыҙ шәхси тормошондағы проблемаларҙы йөрәгенә яҡын ҡабул итә.

### Йоҡоһоҙлоҡтан сара

Билдәле невролог Константин Уманский йоҡоһоҙлоҡтан интеккән кешеләргә махсус шифалы мендәр эшләп алырға тәҡдим итә. Бының өсөн ҙур булмаған киндер тоҡсайҙы ҡомалаҡ менән тултырып, уны көн дә ятҡанған ҡәҙимге мендәргә ҡуша тегергә кәрәк. Комалаҡ еҫе нервылар системаһын тынысландыра. Уны башҡа төрлө үләндәр менән алмаштырырға ла була: бөтнөк үләне, аҡ сәскә, донник һ.б.

✓ *Хәмер кешелеккә Иблис тарафынан ебәрелгән афәт, ағыу. Ҡаршы тора алғандар уның менән ғүмер буйы көрәшеп йәшәргә тейеш. Беренсенән, был көрәш үҙеңдең артыңдан башҡаларҙы эйәртер өсөн кәрәк булһа, икенсенән, Иблис һине бер ҡасан да онотмай.*



ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 11-се һабаҡ: "Иблис мутлыҡтары"

Араҡы эскән кешенең эсенә Иблис инеп урынлаша, тинек. Урынлаша ла, үҙенең ҡыйраткыс гәмәлдәрен башҡарырға, уны эске яҡтан тарҡатырға тотона. Бер аҙҙан ул күңелде яулай, рухты үлтерә, яйлап ҡанды ағыулай барып, бауырҙы, бөйөрҙө, ашҡаҙанды эшләктән сығара, кешене юҡ итә. Эскелеккә бирелгән кешенең физик үлемгә дусар булғанға тиклем, тәүҙә күңеле үлә, рухы һына. Күңеле үлеп тә оҙаҡ йәшәгән кешеләр бар. Ниндәлер уларҙы "зомби" тиҙәр. Уйлаһаң, уйылып китерлек: кеше ҡәҙимге тормош менән йәшәй, һулыш ала, туҡлана, йоҡлай, ер өҫтөнән атлап йөрөй, әммә үҙе юҡ, сөнки күңеле үле. Ундайҙарҙың күҙ ҡараштарында өмөт осҡондары юҡҡа сыға, бары тик "мәғәнәһеҙлек" кенә сағыла. Хахылдап көлөүҙәре лә үҙенеке түгел, Иблистеке...

Хәмер кешелеккә Иблис тарафынан ебәрелгән афәт, ағыу. Ҡаршы тора алғандар, йәғни эсеүҙән ваз кискәндәр уның менән ғүмер буйы көрәшеп йәшәргә тейеш. Беренсенән, был көрәш үҙеңдең артыңдан башҡаларҙы эйәртер өсөн кәрәк булһа, икенсенән, Иблис һине бер ҡасан да онотмай. Аҙымың һайын һәр саҡ һағалап ҡына тора: холҡондоң йомшаҡ яҡтарын барлай, көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙа албырғатып, ауыҙына араҡы ҡойорға самалай. Хатта үҙ-үҙеңде белмәй, аңлылыштан ғына йотоп ҡуйҙыңмы, бойороҡтарын бирергә тотона. Иң тәүҙә, әлбиттә, өҫтәп эсеүеңде талап итә. Оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөп, ҡабат "ысҡынып" киткәндәрҙән Иблис үткән көндәре өсөн үсен ала. Күптәр был саҡта бер туктауһыҙ эсә.

Араҡыға ҡаршы көрәште, айыҡ тормошҡа ынтылышты Иблискә ҡаршы көрәш тип аңлағанда ғына ниәтеңдең бойомға ашырына тулы ышаныс бар. Был йәһәттән хәмер - хәрәм ризыҡ, ул градуслы шыйыҡса ғына түгел, Иблис тәғлимәтен бойомға ашырыусы ҡорал, кешене әхләҡи яҡтан тарҡатыусы идея. Шәхесте бер ниндәй идеология ла араҡы кеүек эстән ҡыйрата алырлыҡ көскә эйә түгел. Беҙ көн дә ашаған бойҙайҙан яһалған ризыҡты, икмәкте алайыҡ. Икмәк кешене күпме аслыҡ һәләкәттәренән ҡотҡарған, шул уҡ ваҡытта уның "бер туғаны" булған хәмер кешелекте һәләкәткә алып килә. Әйтерһең дә, Әҙәм балаһы был ризыҡ аша һынау үтә. Улай ғына ла түгел, уға бер үк бойҙайҙан яһалған ике ризыҡты һайлау хоҡуғы бирелгән. Айырма шунда ғына: икмәк - Аллаһы Тәғәләнеке, хәмер - Иблистеке.

Иблис минә үҙенең илселәрен бер туҡтауһыҙ ебәреп торҙо. Ниндәй генә сүрәткә инеп килмәне улар? Күңелемде сәбәпһеҙ күккә күтәргән ҡыҫыр шатлыҡ, әрһеҙ ҡупайыу, урынһыҙға сығырымдан-сығарған көтөлмәгән сәбәләнеү, йөрәгемдең һәм йәнемдең барлығын иҫемә төшөргән тәнемдәге ауыртыныу тойғоһо, эшемдәге бербер артлы килгән уңышһыҙлыҡтар, һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Эй ныҡышты Иблис, эй тырышты. Уның маҡсатын башта уҡ төшөнөп алдым: нисек булһа ла сығырымдан-сығарып, күңелемдең бушап ҡалған мәлен ҡарауыллап, ауыҙыма үҙенең ризығын ҡоймаҡсы ниәте. Шул саҡта: "Ни өсөн кеше тиктән-тиккә эсә?"- тигән һорауға ла яуап таптым, буғай. Иблис ике осраҡта кешегә араҡы эсерә ала. Беренсеһе, әйткәнемсә, күңел бушап ҡалғанда. Күңел был саҡта ҡорғаҡһыған мискәгә оҡшаш була. Кеше Иблис һыуынан күңеллелек ала ла, иртәгәһен кисә ҡорғаҡһып ҡына торған күңеленең инде ҡорой барыуын тойоп, тағы ла йота, өсөнсә көндә кибә башлағанынан һиҫкәнеп, ҡурҡышынан мәжбүри рәүештә эсеп, Иблистең ҡармағына бөтөнләйгә ҡаба.

Тик буш һауытҡа ғына нимәлер ҡойорға була. Был, ысынлап та, шулай. Буш күңел дә буш һауытҡа бәрәбәр. Әммә Иблис хискә, тойғоға, шатлыҡҡа тулы күңелгә лә үҙенең һыуын ҡойорға һәләтле. Был - артыҡ шатланыу, елкенеү бәләһе. Ни өсөн тиһегеҙме? Кеше күңеле ашып-ташып торғанда, уның сиктәренән артылып түгелгән тойғо аҡылды, зиһенде томалап ҡуя. Иблис был осраҡта әҙер генә тора. Артығыраҡ түгелеп, күңелдең бушаңҡырап ҡалған өлөшөнә үҙенең эсемлеген ҡойоп та өлгөрә. Аҙаҡ былай ҙа хискә тулы күңелде осондороға тотонмаһынмы...

Шулай итеп, уларҙы ҡужғытып ебәрә лә, бушай барған урынға тағы ла шул эсемлекте тултырырға тотона.

Күңелемдең бушап ҡалған саҡтары булманы түгел, булды. Тормош бит, беҙ уның көтөлмәгәнлектәренән бөтөнләйгә азат түгелбеҙ. Әммә ул мәлдәр ҡыҫҡа ғына тойолдо, ни өсөн тигәндә, мине Мөхәббәт тойғоһо ялмап алғайны. Донъяла яҡын кешем барлығын иҫемә төшөрөүем була, йәһәт кенә мөлдөрәмә тулыша инем һәм Иблис үҙенең эләктәрен ҡылырға ла өлгөрмәй ҡала ине.

Бер нисек тә мине алдыра алмаған Иблис күңелемдән ошо оло тойғомдо алып ташлар өсөн үҙенең артабанғы уй-мәкерен ҡорҙо. Әйтергә кәрәк, маҡсатына ирешә ул, ҡәһәр һуҡҡыры!

Бер көн яныма шундайын йәш һәм сибәр һылыу килде. Күҙҙәремә ҡараны ла, ягымлы йылмайҙы. Беҙ ир-ат бигерәк бер ҡатлы шул, һәр ҡыҙҙың үҙебеҙгә ҡарап йылмайыуын, күҙ ҡыҫыуын айырым иғтибар тип ҡабул итергә әҙер генә торабыҙ. Бер секунд эсендә күҙ алдыбыҙға уның менән буласаҡ яҡынлыҡты күҙ алдына килтереп, тамшанабыҙ. Мин, барыһын да онотоп, ҡапыл үҙгәрҙем кеүек.

Ысынында иһә, был күңелемдәге оло тойғоға һынау ғына булған икән. Уның шулай икәнлеген мин теүәл бер йыл үткәс кенә аңланым. Иблистең был ғәләмәтенең мәғәнәһенә лә төшөндөм. Тимәк, мине бер нисек тә алдыра алмаған, ул иң тәүҙә күңелемдәге тойғоно үлтерергә, аҙаҡ инде бушап ҡалған "һауытҡа" шарап ҡойорға ниәтләнгән. Иблискә "кукиш" күрһәттем һуңынан. Хәҙер инде шуны беләм: әгәр ҙә күңелдәге Мөхәббәт ысын тойғо икән, Иблис көсһеҙ. Сөнки ул тойғоно кешегә Аллаһы Тәғәлә бүләк итә, уны үҙе генә тартып ала. Ә Иблис иһә, һөйөү шарабы менән минең башты ҡатырып, ҡаңғырғанымда кәсәләрҙе алмаштырырға самалаған.

Оҙаҡ эсеүҙән күңелдәре үлеп, рухтары ҡыйралған кешеләрҙе осратһам, уларҙың йөҙөндә, күҙ ҡараштарында күрәм мин Иблисте. Улар минә эсергә тәҡдим итһә, быны тик бер төрлө генә баһалайым: Иблис минә нисек тә яҡынларға итә. Берсә инәлә, ялбара, хатта йоҙроҡ төйнәп ҡурҡытырға, өҫтөмә ташланырға ла яҫҡына уларҙың булмышындағы дошманым. Эсергә аҡса һораттыра, нисек булһа ла үҙенә хеҙмәт иттерергә тырыша. Тәүге осорҙа мин ундайҙарҙы йәлләп, "баш төҙәтерлек" бирә торғайным, аҙаҡ Иблискә мөнәсәбәтле булыуҙан бөтөнләйгә тыйылдым.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

Йоҡларға ятырҙан ярты сәғәт алда үлән сәйе эсергә лә мөмкин. Уны шулай уҡ бөтнөк үләне, аҡ сәскә, фенхель орлоҡтары һәм бесәй үләндәрен тигеҙ нисбәттә ҡушып әҙерләгеҙ.

Көн дә бер үк ваҡытта ятып, иртәнсәк билдәле сәғәттә торорға тырышығыҙ. Кискелеккә серотонинға бай помидор, һоло йәки дөгө бутҡаһы, балыҡ кеүек аҙыҡ-түлек менән туҡланыу яҡшы.

### Бәхет формулаһы

Бәхетте үлсәп булмай, әммә кешенең бәхетле була алыу һәләтен бөләкәй саҡта уҡ баһалап була икән. Психологтар быны түбәндәге тест ярҙамында асыҡлаған: 5 йәшлек балаларға мармелад таратып биргәндәр. Шунан уны таратыусы оло кеше бер нисә минутҡа бүлмәнән сығып торасағын белдерә. Ул ингәнсе мармеладын ашамай түҙгән балаға тағы ла бер мармелад бирәләр. Ә кем ашай, уға башҡа был тәмлекәс эләкмәй. Балаларҙың күпселеге мармеладын ашай һәм был нормаль хәл иҫәпләнә. Ә кем ашамай түҙә, уларҙың EQ индексы - эмоциональ интеллигентлығы юғары, тип табыла. Был балалар үҙҙәренең теләктәрен яҡшыраҡ контролдә тота һәм тормошта ла күп нәмәгә өлгәшәсәк.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ыңғай ҡара

**"Стакан яртылаш бушмы, әллә тулымы?" Бындай һорауҙарға алынған яуаптар йыш ҡына беҙгә кешенең пессимист йәки оптимист булыуын асыҡларға ярҙам итә. Түбәндәге ваҡиға ла ошоно раҫлай.**

Ҡатындарҙың икеһе лә бер үк офиста эшләй һәм бер төрлө эш хаҡы ала. Анна аҙ түләүҙәренә зарлана, унан шул аҙ ғына аҡсаға күпте талап итәләр кеүек тойола. Ул яңы эш көнөн теләкһеҙ генә ҡаршы ала һәм эштән арып, кәйефһеҙ ҡайтып китә. Мэри иһә, киреһенсә, ышаныслы эше булыуынан бәхетле һәм аҡсаһын түләүҙәрҙе ҡапларға ла, башҡа төрлө сығымдарына ла еткерә ала. Ул ҡушылған һәр эшкә стимул булараҡ ҡарай һәм унан талап ителгәндең барыһын да яҡшы итеп башҡарып сығырға тырыша. Ул яңы эш көнөнән уңыш көтә һәм көн буйы башҡарған эшенән ҡәнәғәт ҡалып, ғаиләһен күреү ҡыуанысынан шат йөҙ менән ҡайтып китә. Хеҙмәткәрҙәрҙең аттестация үтеү ваҡытында Мэрины вазифа буйынса үрләтәләр, уға өҫтәмә эш хаҡы түләйҙәр. Анна иһә былардан мәхрүм ҡала һәм быға аптырырға ла кәрәкмәй.

Ошонан сығып, шуны әйтергә була: һәр нәмәгә ыңғай ҡарарға өйрәнгәндә, ябай ғына көндәлек тормош ваҡиғалары ла күп ҡыуаныстар килтерә ала. Һин һәр яңы көндән ҡыҙыҡлы тәьсораттар көтөп тора алаһың, йәки тыуасаҡ көнгә ҡалтыраныып, үҙеңде карауаттан һөйрәп торғоҙаһың. Иртәнге ашты тыныс итеп ашап, яҡшы итеп әҙерләнеп китер өсөн иртәрәк тора алаһың, йә иһә юрған аҫтында һуңғы минутҡа тиклем тормай ятып, һуңынан артыңа ут ҡапҡандай эшкә йүгерәһең. Был осраҡта инде аңың да, тәнең дә арыған була, артыҡ ашығыуҙан уйҙарың сыуала. Һинең тормошҡа ҡарашың үҙеңде уратып алған хәл-ваҡиғаны тыуҙырырға ярҙам итә, һине йә бәхетле, йә бәхетһеҙ кеше итә. Әлбиттә, тормош һәр кемебеҙгә лә проблемалар, ауырлыҡтар һәм ҡайғылар алып килеп тора һәм бынан беҙ ҡасып ҡотола алмаясаҡбыҙ, әммә әгәр ҙә һин стаканыңды яртылаш тулы, тип иҫәпләйһең икән, был ҡарашың тормоштағы ҡатмарлы мәлдәрҙе енеп сығырға ярҙам итәсәк.

## Ысын күңелдән ярат

"Әгәр ҙә нимәнелер яратаһың икән, был тойғоға ирек бир. Әгәр ҙә ул һинә кире әйләнеп ҡайтмаһа, тимәк, был һинә тәғәйенләнмәгән һәм уны башлауҙың да кәрәге булмаған". Был һүҙҙәрҙең асылы нимәлә һуң? Әйтәйек, әгәр ҙә беҙ ихлас һәм киң күңел менән яратырға өйрәнмәйбеҙ икән, үҙебеҙҙең мөхәббәт объектыбыҙҙы саманан тыш бәйләлек менән юҡҡа сығарыуыбыҙ ихтимал. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған һөйөү сәләмәт ерлектә тигеҙ мөнәсәбәттәр нигеҙендә үҫеп сыға.

Әгәр ҙә беҙ һыҙланыуҙар кисереүҙән йәки бүтәндәргә бер ҡасан да һөйөү һәм изгелек күрһәтмәслек ситләтелеүҙән ҡурҡабыҙ икән, беҙҙең тормошобоҙҙа мөхәббәт бик аҙ буласаҡ. Әгәр ҙә беҙ башҡаларҙан һөйөүебеҙҙе йәлләмәйбеҙ икән, ул тағы ла артасаҡ һәм беҙгә кире әйләнеп ҡайтасаҡ.

Бүтәндәргә ҡарата һөйөүеңде белдерер өсөн әллә күпме яҡшы ысулдар табырға мөмкин. Үҙ ваҡытында кәрәкле урында булыу, кеше тормошондағы етешһеҙлектәрҙе артыҡ соҡомай, уны бүлдермәй тыңларға өйрәнеү яҡшы башланғыс булып тора. Нимәне булһа ла һөйөү менән башҡараһың икән, тағы ла күберәк һөйөү алырға әҙер бул.

"Хуплау, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт күрһәтеп йәшәгән кеше, ҡайҙа ҡараһа ла, был сифаттарҙы таба" тигән боронғо мәҡәл бар. Әжерен көтмәйенсә, еңел итеп һөйөүеңде күрһәтә бел, һәм уға яуап бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# СИТ ТАРАФТА БЕҘҘЕ НИ ТАНЫТА,

## нимә визит карточкаһы була ала?

**"Киске Өфө" гәзите менән "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы "Сәләм" ижад берекмәһенең берлектәге конкурсы аҙағына яҡынлаша. Һайлап алынған объекттар өсөн тауыш биреү сентябрь аҙағында тамамланасаҡ.**


БАШҠОРТ БАЛЫ


БАШҠОРТ ҠЫМЫҘЫ


ҠУРАЙ


"УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ


"ШҮЛГӘНТАШ" МӘМЕРЙӘҺЕ


АСЫЛЫКҮЛ


ЯНҒАНТАУ


ИРӘМӘЛ


АҒИҘЕЛ


КРАСНОУСОЛ МИНЕРАЛЬ СЫҒАНАҠТАРЫ


САЛАУАТ ЮЛАЕВ ҺӘЙКӘЛЕ


БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ


КЕЙЕҘ


ДЕБЕТ ШӘЛ


МОРАҘЫМ ТАРЛАУЫҒЫ


ТОРАТАУ

Әлбиттә, конкурс мәлендә гәзиттә баҫылған мәҡәләләр, "Сәләм" ижад берекмәһе күрһәткән телефильмдар аша үҙебеҙ өсөн бик күп асыштар яһаныҡ, фекер төйнәнек. Иң ҡыҙығы шул: һәр кемгә үҙе йәшәгән ауыл, районындағы йылға-күл, тауҙар, түбәләстәр, үҙ төбәгенә хас шөғөл ҡәҙерле һәм мөғжизә булып күренә. Шуларҙан сығып фекер йөрөткәндә, беҙ, ысынлап та, мөғжизәләр илендә йәшәйбеҙ икән! Шуға ла беҙгә хат яҙыусы, шылтыратыусы күпселек уҡыусыларыбыҙҙың бер фекере менән килешмәй булмай: Башҡортостанда ете мөғжизәне генә айырып ҡарау дөрөҫ түгел, ти улар. Уларҙың фекеренсә, һәр объект буйынса ошондай конкурс үткәреп була, мәҫәлән, "Башҡортостандың ете күле", "Башҡортостандың ете тау түбәһе" һәм башҡалар.

Киләсәктә, моғайын, шулай итербеҙ. Ә хәҙер ошо иғлан иткән конкурсты ослап ҡуяйыҡ. Һәм тағы ла бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алып үтәбеҙ: конкурсты иғлан иткән ваҡытта беҙ бер район, төбәктә генә билдәле объектты, күренеште, шөғөлдө күҙҙә тотманыҡ. **Ете мөғжизә исемлегенә Башҡортостаныбыҙҙы сит тарафтарҙа, донъяла танытырҙай, уның өсөн визит карточкаһы булырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар инергә тейеш.** Ундай объекттар һайлап алынған 16 объект эсендә бар ("Сәләм" ижад берекмәһе 15 объектты һайлап алған, беҙ 16-сы объект итеп Торатауҙы ла индергәнбеҙ). Мәҫәлән, башҡорт балын бар донъяла беләләр, башҡорт ҡурайы моңо Башҡортостаныбыҙҙың рухи сағылышы булып шулай уҡ бар донъяны хайран итә. "Урал батыр" эпосы һымаҡ халҡыбыҙҙың ғына түгел, ә дөйөм кешелектең тәүдонъяһын һүрәтләгән бөйөк ижад өлгөһөн дә бар донъяла башҡорттоҡо итеп таныйҙар. Тәбиғәт объекттарының да "Шүлгәнташ" һымаҡ донъяға киң билдәлеләрен генә был исемлеккә индерергә тейешбеҙҙер. Уҡыусыларыбыҙ фекеренсә, кеше ҡулдары менән тыуҙырылған объекттар, шөғөлдәр был исемлектә була алмайҙыр - быныһы беҙҙең уйлап еткермәү ғәләмәте булды, ахры. Хатаны ваҡытында таныу мөһим.

Шулай итеп, әйҙәгеҙ, тауыш биреүҙе әүҙемерәк атҡарайыҡ. Тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны - 252-39-99, 246-03-24, "Киске Өфө" гәзите сайты - **www.kiskeufa.ru**, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны -251-73-91, 251-90-44, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - **www.salyam-bst.ru** аша ла атҡарыла.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*Аһ-Аһ...*

# ВОДИТЕЛДӘРҘЕ...

## ҡыуаҡ артында кем һағалай?

**1 сентябрҙән РФ Эске эштәр министрлығының Административ регламенты үҙ көсөнә инде. Быға тиклем ЮХХДИ юл-патруль хеҙмәте эштәре буйынса элекке ҡағиҙәгә ярашлы эш итте, хәҙер төрлө хәл-ваҡиғаларҙа инспектор водителдәр һәм йәйәүлеләр менән нисек эш итергә тейешлеген ентекле аңлатҡан документ барлыҡҡа килде.**

Регламентты индереү менән бер ниндәй ҙә революция булмаясаҡ. Гаишниктарға, элеккесә, уларҙың яратҡан ысулын ҡулланыу, йәғни ҡыуаҡ артынан йәки милиция билдәләре булмаған автомобилдәрҙә юл хәрәкәтен күҙәтеү мөмкин буласаҡ. Улай ғына ла түгел, юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоусыларға ҡарата бындай һунар итеү формаһы регламент тарафынан бойоролған. Шунан уйлап ҡара инде: ЮХХДИ өсөн юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге мөһимме, әллә халыҡҡа ни тиклем күберәк штраф һалыу мөмкинлегеме? Барыһы ла ябай ғына бит: юл ситендә йәшенмәй генә тор, жезл тотҡан кешене күреү менән теләһә ҡайһы дыуамал водитель шундуҡ тиҙлеген кәметәсәк. Әммә бындай саралар саманан тыш революцион булып күренгәндер инде. Штрафтарһыҙ буламы ни?!

Автоһәүәҫкәрҙәр регламенттың ҡайһы бер пункттары буйынса Интернетта шаулаша. Бына, мәҫәлән: хәҙер инспектор юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыға честь бирергә тейеш түгел. Йәнәһе лә, жезл ҡулды күтәрергә ҡамасаулай. Бына ни өсөн улар водителдәрҙе сәләмләй һалып бармай икән! Тағы ла бер яңылыҡ. Регламентта инспектор автомобилгә ҡайһы яҡтан килергә тейешлеге лә яҙылған: "Водителгә, ҡағиҙә булараҡ, ул ултырған яҡтан мөрәжәғәт итилергә тейеш. Объектив хәлдәргә ҡарап (машина йөрөй торған юлда торғанда, шәхси хәүефһеҙлеккә ҡурҡыныс янағанда, юл өҫтө бысраҡ булғанда һ.б.) хеҙмәткәр водителгә ҡаршы яҡтан мөрәжәғәт итә ала". Шулай уҡ юл-патруль хеҙмәте хеҙмәткәрҙәренә рәсми рәүештә диктофон йәки видеокамера ҡулланыу рөхсәт ителде. Әммә бөгөндән алып хеҙмәткәр эш ваҡытында водителгә үҙен видеоға төшөрөргә ҡамасауларға тейеш түгел. Әгәр ҙә һеҙҙең хоҡуғығыҙ боҙола икән, 1 сентябрҙән ҡыйыу рәүештә фотоаппарат, камера, кеҫә телефонына инспекторҙы төшөрөп ала алаһығыҙ.

**Әйткәндәй...**

**Автобустарҙа хәүефһеҙлек ҡайышы булдырасаҡтар. Рәсәй президенты Дмитрий Медведев юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген иҫкәртеү мәсьәләһенә ҡағылышлы кәңәшмә йомғаҡтары буйынса йөкләмәләр теҙмәһе раҫланы. Был турала Кремль матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Быйылғы йылдың июль айында ҡала-ара пассажир автобустары ҡатнашлығында булып үткән етди юл һәләкәттәре быға сәбәпле булған. Хәҙер хөкүмәткә 2010 йылдың 1 ғинуарынан ҡала-ара автобустарында хәүефһеҙлек ҡайышы, шулай уҡ водителдәрҙең хәрәкәт, эш һәм ял итеү режимын күҙәтеүен контролдә тотоусы техник саралар булырға тейешлеге йөкмәтелгән.**

# ИЛДӘ БЕРӘҮ - АСЫЛЫҠАЙ

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсын хуплайым. Һанап кителгән мөғжизәләрҙең һәр береһе үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ.**

Яҡташыбыҙ, оло ғалим Рәшит Шәкүр Башҡортостан ынйыһы Асылыкүл тураһында бик матур итеп тәфсирләп яҙып сыҡты инде. Беҙ уны бик хөрмәт итәбеҙ һәм оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Асылыкүл - мине лә хыялый иткән мөғжизә, уның тураһында үҙ һүҙемде еткерергә теләйем.

Асылы (халыҡ уны яратып шулай ти) яҡын арала ғына ятһа ла, унда йыш булырға тура килмәй. Быйыл Себер яҡтарынан ҡунаҡтар килеп төшкәс, Асылыны күрһәтеү маҡсаты менән сығып киттек. Иҫ- аҡылың китерлек хәл. Күлде ҡырмыҫҡалар һырып алған тиерһең - энә төртөр урын юҡ. Машина менән күлде әйләнеп йөрөп, көскә урынлаштыҡ. Шишмә һыуынан төрлө үләндәр һалып, сәй эскәс, һыу инергә киттек. Унда ҡайһыһы һыу керә, ҡайһыһы балсыҡҡа (аҡ, ҡыҙыл төҫтә) буялып мәж киләләр. Әйтерһең дә, һабантуй гөрләй...

Беҙ бында хужа, тигән төҫлө, баштарын ғорур күтәреп, торналар ишәрләп йөҙә. Ниндәй һоҡланғыс күренеш!

Тирә-яҡты ҡыҙырып йөрөйөм. Нимә генә үҫмәй бында: ҡурай еләге, ер еләге ҡып-ҡыҙыл булып бешеп тулышҡан, һап-һары булып һырғанаҡ йымылдай, гөлйемеше, миләше, баланы... Хуш еҫле үләндәренән баш әйләнә...

Ҡояш байығас, күл өҫтө серле төҫ алды. Күл өҫтөнән әкрен генә ниндәйҙер ҙур балыҡтар йөҙөп үтә. Күл тыныс, ял итә, ҡолас киреп йоҡларға ятҡан.

Иртә. Ҡояш сыға. Шул ҡәҙәр хозурлыҡҡа, матурлыҡҡа шаҡ ҡатып, яр башында баҫып торам. "Эй, Хоҙайым, ошондай гүзәллекте тыуҙырырға тик һинең генә ҡөҙрәтеңдән килә", тим. Шул саҡ йөрәгемде ниҙер семетеп алды. Балаларымдың балалары күрерме был матурлыҡты? Ҡулдарымды күтәреп, ҡояшҡа табан ынтылам. Хәҙер осоп китермен төҫлө. Осоп китеп, ошонда булған һәр кешенең йөрәк ҡылдарына сиртеп: "Эй, кешеләр, тәбиғәттең гүзәл бүләгенә һаҡсыл, мәрхәмәтле булайыҡ, киләсәк быуындарға һаҡлайыҡ", - тип ҡысҡырғы килә.

Яр башында баҫып торам, ә күңелемдән моң ағыла ла ағыла...

Асылыҡай тиеп бер йырлаһам,
Һағыштарҙан күңел арына.
Йөрәк ситлегенән осоп сығып,
Һауаларға ашып ҡағына.

Килдем тағы һинең ярҙарыңа.
Һағыштарым һыуҙа сағыла.
Һинең киңлектәрҙе байҡай-байҡай,
Күҙҙәремдән нурҙар ағыла.

Ҡаршыланың мине тыныс ҡына,
Бөҙрә тулҡындарың гәрәбәләй.
Яр буйында үҫкән йүкәләрең,
Башын сайҡап, мине сәләмләй.

Гәлсәр төҫлө әскелт һыуҙарыңда,
Йым-йым килә ынйы, аҫыл таштар.
Ҡыйылып оҫкан аҡсарлаҡтар менән,
Һәпәләк уйнай алтын балыҡтар.

Әллә һинең шаян тулҡындарың,
Ҡолағыма шулай шыбырлай.
Әллә ярҙарыңда уйылып ҡалған,
Тарих эҙеме икән юйылмай.

Илебеҙҙә берәү Асылыҡай,
"Йөҙөк ҡашы" тиеп данлана.
Сәхрәһендә йөрөп, һыуҙар кисһәң,
Һағыш-хәсрәттәрең тарала.

**Зөләрәм СНИГИРЕВА.**
**Дәүләкән ҡалаһы.**



*ИҒЛАН*

**"Ағиҙел" бюроһы сит телдәрҙән тәржемәләр яһай. Нотариаль раҫланған, техник, юридик документтар менән дә эш итә. Тиҙ, сифатлы һәм арзан. Бәйләнеш өсөн телефондар: 292-32-76, 8-927-31-18-756, 8-927-33-23- 156**

**Адресы: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 85/1 һанлы йорт, 108-се офис. Транспорт туҡталышы: "Ҡунаҡһарай", "Ақтерҙар йорто".**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ ЯНЫНА

## "Ритайым"ға кил әле!

**Ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урындарының береһе булған Салауат һәйкәле янынан бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәй, баш ҡала ҡунаҡтары Өфө менән танышыуҙы батыр һәйкәленән башлаһа, ҡала халҡы ла бында килеп ял итергә ярата. Ә элегерәк был майҙан тағы ла студенттарҙың, башҡорт йәштәренең осрашып, күңел асыр, танышыр, ҡауышыр урыны булған. Бына ошо матур йоланы яңынан тергеҙеү маҡсатында Киров районы хакимиәте үҙ өҫтөнә изге бурыс алған. Хәҙер бында 10 октябргә тиклем һәр шәмбе кис сәғәт етенән унға тиклем "Ритайым" студент йәштәр марафоны үтәсәк.**






"Башҡортостанда йәштәр инициативаһын хуплау һәм үҫтереү йылына арналған был сараның маҡсаты - Салауат Юлаев һәйкәле янында милли уйындар тергеҙеү, студенттарҙың ялын файҙалы ойоштороу, урта махсус уҡыу йорто һәм юғары уҡыу йорто студенттары араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәтен нығытыу", - тине Өфө ҡалаһы Киров районының мәҙәниәт һәм йәштәр эштәре буйынса бүлек начальнигы Зөлфиә Ханнанова. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта халыҡ уйындарын ойоштороу бер ни тиклем онотолдо, йәштәр күпселек буш ваҡыттарын йәйге кафеларҙа, йә дискотекаларҙа уҙғарырға әүәҫләнеп китте. Ә бит тап ошондай урындар әхлаҡһыҙлыҡҡа, әҙәпһеҙлеккә, спиртлы эсемлек, тәмәке тартыу кеүек мауығыуҙарға этәреүсе сәбәп булып тора. Милли мөхиттә халыҡсан уҙғарылған киске уйындар йәштәребеҙҙе бындай кире йоғонтоларҙан ҡурсалап ҡалыр өсөн, уларҙа милли үҙаң, милли рух тәрбиәләр өсөн дә кәрәк.

Әйтергә кәрәк, 29 августа башланған был матур байрамға профессиональ ижад коллективтары һәм билдәле артистар старт бирҙе. Аҡсаҡов исемендәге баҡса, Өфө ҡалаһының Фатима Мостафина исемендәге 20-се һанлы башҡорт гимназияһы һәм Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары төрлө майҙансыҡтарҙа фольклор-уйын программалары ойошторған. Артабан "Ритайым" студенттар марафоны программаһы концерт өлөштән, шулай уҡ фольклор номерҙарын, традицион милли уйындарҙы һәм музыка ҡоралдарында башҡарыуҙы үҙ эсенә алған күңел асыу өлөшөнән торорға тейеш. Унда ҡаланың Киров районы уҡыу йорттары студенттары ҡатнаша. БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы, БР Мәғариф министрлығы вәкилдәренән торған жюри конкурс йомғаҡтары буйынса "Ритайым"дың иң яҡшы һәм әүҙем ҡатнашыусыларын билдәләйәсәк. Еңеүселәрҙе баһалағанда марафон идеяһын ижади яҡтыртыу үҙенсәлеклеге, башҡарыу осталығы, режиссура сифаты иҫәпкә алынасаҡ. Шулай уҡ халыҡ музыка ҡоралдарында уйнау, сараға йәлеп ителгән студенттар һәм ижад коллективтарының иҫәбе лә жюри иғтибарынан ситтә ҡалмаясаҡ.

**Шулай итеп...**

Марафонды **5 сентябрҙә** Өфө сәнғәт училищеһы һәм Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары башлап ебәрҙе. Был шәмбелә Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Өфө информатика һәм иҫәпләү-хисаплау техникаһы колледжы студенттары сығыш яһаясаҡ. Артабан **19 сентябрҙә** 2-се һанлы Өфө педагогия колледжы, Өфө дәүләт технология һәм дизайн колледжы, **26 сентябрҙә** Өфө урман техникумы, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы, **3 октябрҙә** Өфө дәүләт авиация-техник университеты, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһы һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты дауам итәсәк. "Ритайым" студент йәштәр марафоны **10 октябрҙә** еңеүселәрҙе бүләкләү һәм ҙур концерт менән ябыласаҡ. "Артабан беҙҙең башланғысты студенттар үҙҙәре дауам итер, йыл һайын һәйкәл яны йыр-моң, күңелле бейеүҙәр, дәртле уйындар менән шау-гөр килеп торор, тип ышанабыҙ", - ти ойоштороусылар.

**Буранбикә ЙӘНСУРИНА.**

**Студенческий билет, выданный ПЕТРОВУ Артуру Алексеевичу, считать недействительным.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## САҘАҠА БИРӘ ЙӨРӨ...

Рамаҙан айы тамамланғансы фитр саҙаҡаһын биреп ҡуйырға кәрәк икәнлекте әйтеп уҙғайныҡ инде. Тағы ла бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: фитр саҙаҡаһы Ураҙа ғәйете алдынан (быйыл 20 сентябрь) бирелергә тейеш. Фитр саҙаҡаһы шулай уҡ Аллаһы Тәғәләгә шундай мөһим бурысты, Рамаҙан ураҙаһын үтәргә мөмкинлек биргәне өсөн кешенең рәхмәт белдереүе лә. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа әйтелеүенсә, ул Аллаһы Тәғәлә тарафынан ураҙаның ҡабул ителеүенә тәьҫир иң яҡтан, үлем ваҡытындағы яфаларҙы еңеләйтә һәм ҡәбер ғазаптарынан ҡотҡара. Һәр етеш йәшәгән кеше фитр саҙаҡаһын түләргә тейеш, шулай итеп ул күп кешеләргә ҡыуандырасаҡ һәм мохтаж булыусыларға ярҙам итеү нисек мөһим икәнлеген күрһәтәсәк. Икенсе яҡтан, мохтаж булыусылар үҙҙәре кемдәнder ярҙам һорап йөрөүҙән ҡотола. Шулай итеп, йомғиәттә кешеләр араһында һәр рамаҙан айынан һуң яңырып тороусы һәм үҙенең сафлығын ғүмер буйы һаҡлаусы йылы мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килә.

Фитр саҙаҡаһы күләме 2 кг бойҙай хаҡы булырға тейеш. Быйыл мәсеттәрҙә ошондай хаҡтар ҡуйылды: ураҙа тотоусылар - 50 һум, фидиә хаҡы (йыш ауырыу, йәки ҡартлыҡ сәбәпле үҙе ураҙа тота алмаған кешенең һәр көн бер ярлыны туҡландырып тороуы) - 100 һум, хәллерәктәр - 250 һум бирергә бурыслы.

**Әйткәндәй...**

**"Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы үҙенең фитр саҙаҡаһын Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се республика балалар йортона алып барып тапшырҙы. Етемдәрҙең күңелен күреү - сауаплы эш, иншалла, Аллаһы Тәғәлә беҙҙең был ғәмәлебеҙҙән ҡәнәғәт ҡалғандыр, тип өмөт итәбеҙ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҒҮМЕРҘЕҢ ТӘҮГЕ ЯРТЫҺЫН...

### ата-әсә ағыулай

Балаһы өйҙә саҡта әсәнең елкәһе ауырта, балаһы урамда саҡта уның йөрәге ауырта.

**(Ралф Эмерсон).**

Ҡыҙыҡ бит: һәр быуын һайын балалар насарая, ата-әсәләре яҡшыра бара. Бынан шундай һығымта яһарға мөмкин: тимәк, насар балаларҙан яҡшы ата-әсәләр барлыҡҡа килә.

**(Веслав Брудзиньский).**

Ғүмерҙең тәүге яртыһын - ата-әсәләр, икенсе яртыһын балалар ағыулай.

**(Кларес Даррoу).**

Ата-әсәләр шул тиклем ябай ҡоролмаға оҡшаш, улар менән хатта балалар ҙа идара итә ала.

**(Питер Устинов).**

Ата-әсәләрҙең алама ҡылыҡтарын үҙгәртеп өлгөрә алмайбыҙ шул, сөнки беҙ ошоно эшләр йәшкә еткәндә, улар ҡартайған була.

**(Миньон Маклофлин).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт бер батша металды алтынға әйләндереүҙең бөйөк серен белгән аҡыл эйәһе эргәһенә бара һәм унан шулай тип һорай: "Уҡытыусы, һин миңә лә ул серҙе ас һәм ғүмереңдең аҙаҡҡы көндәренә тиклем бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәҫһең. Һиңә мин үҙем батшаларса хөрмәт күрһәтәсәкмен". Ҡарт уны тыныс ҡына тыңлап тора ла, шулай тип һорай: "Ә һин ошо ғилем хаҡына үҙеңдең хакимлығыңды ҡорбан итергә әҙерһеңме?" "Нисек был турала һорарға телең әйләнә? - тип асыулана батша. - Мин бит бының өсөн һине яҙалаһындар, тип әмер бирә алам..." ти батша бер аҙ сығырынан сығып. "Юҡ, һин улай итә алмайһың, - ти ҡарт. - Минең тәнем физик ауыртыуҙан ҡуркмай, ә йәнемә һин тейә алмайһың. Уның хужаһы - Бөйөк Аллаһы Тәғәлә. Хаҡы бер тинлек нәмәләрҙән мәхрүм булыуым миңә бер ни ҙә тормай". "Һин аҡыллы кешелер, моғайын, - ти батша йомшарып, - мин һине ебәрәм һәм алмашка бер нәмә лә һорамайым, хатта бүләкләйем".**

**Уҡытыусы уға йылмайып былай ти: "Һиңә рәхмәт белдерәм. Бына һин металдың алтынға әйләнеү серен белдең дә инде. Һинең миңә янап маташыуың -ул тутыҡҡан металдың бер буш кисәге генә, әммә һин уны мыһырбанлыҡ һәм шәфҡәтлелек күрһәтеп, алтынға әйләндерҙең..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы
ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 3907